ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

1-7 апрель (алағарай) 2017

№ 13 (743)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Кәрәкле законлар...**

ҡабул да ителһен, эшләһен дә



5

**Спортта сит ҡаршылыҡтар юҡ,**

һин ни бары үҙеңде генә еңергә бурыслыһың




8-9

**Залыбыҙҙа...**

француз иҙәне йәйелгән



9,16

**Ғәмәлдәребеҙ...**

ҡоро һүҙ түгел



12-13

**ТВ-программа** 14


***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Апрелдән 2017 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индексы "Киске Өфө"гә яҙылыу - 559 һум 56 тин, 50673 индексыһы (ойошмалар һәм предприятиелар өсөн) - 589 һум 56 тин, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн - 447 һум 64 тин тәшкил итә. Гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер, ғәҙәттәгесә, матур китаптарға лайыҡ буласаҡ. Кем алыҡ?***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Тормошта көлкө тыуҙырған ниндәй күренештәр, парадокстар хаҡында һөйләр инегеҙ?

***Фәнил ИШБИРҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Уйлай, һөйләй китһәң, ысынлап та, тормошобоҙҙа көлкөлө хәлдәр ҙә, ҡыҙғаныстары ла күп шул. Айырыуса сәйәсәт өлкәһендә көлкөлө хәлдәргә килтергән абсурд осраҡтар байтаҡ. Бына, мәҫәлән, яңыраҡ ҡына Дәүләт Думаһының юғары трибунаһынан "Берҙәм Рәсәй" партияһының ҡайһы бер ағзаларына төбәлгән шундай янау яңғырауына күптәрегеҙ шаһит булғандыр: "Мәскәү өлкәһендә ЛДПР ағзаларын һайлауҙар исемлегенән сығырға мәжбүр итеп, уларға баҫым яһалған, ҡурҡытҡандар. Быйың менән мафия командалыҡ итә, ә һеҙ уларҙы яҡлайһығыҙ. Киләһе йыл Кремлгә килгәс тә һеҙҙе атып һәм аҫып бөтөрәм, әҙәм аҡтыҡтары!" Бындай хәлгә нисек көлмәйһең? Хәйер, Жириновскийҙың ауыҙын үлсәп асмай торған ғәҙәтенә күнегеп тә бөткәнбеҙ инде. Көлкө булыр ине лә ул, шул уҡ ваҡытта ҡыҙғаныс та булмаһа... Ул бит бәғзе депутаттарҙы коррупцияла ғәйепләй. Әлбиттә, бындай ғәйепләү махсус органдар эше, ләкин, урыҫ әйтмешләй, "пока суд да дело"... Мафия бит беҙҙә утта янмай, һыуҙа батмай: әлеге мафияның эшмәкәрлектәре судҡа тиклем барып етмәйәсәге лә, Рәсәйҙә коррупцияны бөтөрөп булмаясағы ла көн кеүек асыҡ. Шуға ла Жириновскийҙың йән әрнеүен үҙенә генә хас репертуарҙа белдереүе, бер яҡтан, көлкө тойолһа ла, икенсе яҡтан, уны аңларға ла булалыр.

Утта янмай, һыуҙа батмай, тигәндән, тап шул һүҙҙәргә тағы бер миҫал - әлеге лә баяғы ҡот осҡос ҡолас алған коррупция арҡаһында отставкаға ебәрелгән А. Сердюковтың трагикомик хәлдә тороп ҡалыуы уға ҡайтанан юғары вазифаларға үрләргә бер ҙә ҡамасаулыҡ итмәне. "Комсомольская правда" гәзите яңыраҡ ҡына әле ошо хаҡта "Сердюковты кем туҡтатыр? Ул бит хәҙер КамАЗ-да!" тип көлөп яҙҙы. Бәктиһәң, оборона һынлы министрлыҡтан башынан һыйпап ҡына отставкаға ебәрелгән был әҙәм бик кәрәкле кеше булып сыҡҡан да. Хурлыҡлы рәүештә отставкаға киткәндән һуң ғына ла ул 8 урынға юғары вазифаға тәғәйенләнгән! Хөкүмәтебеҙҙең атайҙарса йылы хәстәрлеге менән ул авиация һәм космос тармағының эре-эре холдинг һәм корпорацияларына етәкселек итә. Ахыр сиктә, хатта КамАЗ кеүек автогиганттың да Сердюков һәләттәренә мохтажлыҡ кисереүе асыҡлана, һәм күптән түгел ул ошо акционерҙар йәмғиәтенең директорҙар советы составына индерелә. Көлкөмө был, әллә, һеҙ әйтмешләй, парадоксмы?

(Дауамы 2-се биттә).

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ*

# ХАЛҠЫБЫҘҒА ОРАН ҺАЛА,

## уйландыра, ғәмләндерә

**"Киске Өфө"нө 2003 йылдан башлап алдырып уҡыйым. Был гәзит менән тәүге танышыуым әле лә хәтерҙә. Ниндәйҙер бер гәзиттән йыртылып бөткән бер киҫәге ҡулыма килеп эләкте. Шул өҙөктә яҙылған юлдарҙы уҡып ҡарау менән "Был бик шәп гәзит күренә, нисек атала һуң ул?" тип, таныштарымдан һораша башланым. Миңә был гәзит битенең "Киске Өфө"нән икәнен әйттеләр. Ул мәлдә мин хаҡлы ялға сыҡҡан инем инде.**

Гәзит ҡулыма килеп эләккәс тә: "Ҡайһылай шәп гәзит был, ниңә ул беҙ эшләгән саҡта ла нәшер ителмәне икән, тәрбиә дәрестәрендә балалар менән рәхәтләнеп уҡыр инек", - тип үкенеүем хәтерҙә уйылып ҡалған.

"Киске Өфө" гәзитенән мин күңелем көҫәгән һорауҙарға яуап табам, йәнемә рухи аҙыҡ алам. Баҫманың бөтөн биттәрен дә ентекләп уҡып сығам. Ниндәй генә өлкәне яҡтыртмай ул! Тормош менән, заман менән бергә атлаған гәзит ул - "Киске Өфө". Көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәрә, тарих төпкөлөнә лә төшә. Сәйәси ваҡиғаларҙы үҙ халҡыбыҙ күҙлегенән нығыраҡ аңларға ярҙам итә. Был айырыуса сәйәсәт темаһынан алыҫыраҡ йөрөгән кешеләргә - ҡатын-ҡыҙҙарға файҙалы. "Уңыш ҡаҙан!" рубрикаһындағы кәңәштәрҙе тормошта ҡулланабыҙ, позитив булырға өйрәнәбеҙ.

Тағы, был гәзит кешегә оптимистик рух менән йәшәргә ярҙам итә. Мин ни өсөн бындай фекергә килдем? Сөнки уның биттәрендә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәйенсә, һәр күренешкә ыңғай ҡараш менән баҡып, тормоштан йәм табып йәшәргә саҡыралар. Гәзиттең баш мөхәррире лә үҙенең сығыштарында һәр саҡ: "Шөкөр итеп йәшәйек", - ти. Был дөрөҫ саҡырыу, минеңсә. Булғаны менән риза булып, холоҡһоҙланмай, яҡшылыҡҡа ынтылып йәшәргә кәрәк шул. "Ҡараңғылыҡты әрләгәнсе, бәләкәй генә булһа ла үҙ шәмеңде яндыр!" - был аҡылды ла "Киске Өфө"лә уҡығайным.

(Дауамы 2-се биттә).




*Фотоһүрәттә - Белорет почтампы начальнигы урынбаҫары Вәлимә Гарданова.*

12+

✓ *Әйткәндәй, "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, теләһәң, квитанцияңды ебәреп, бынамын тигән китаптарға эйә булаһың. Теләһәң, тыуған көнөңдә гәзит биттәрендә редакциянан ҡотлау сәләме ҡабул итеү мөмкинлеге лә бар.*



"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# ХАЛҠЫБЫҘҒА ОРАН ҺАЛА,

## уйландыра, ғәмләндерә

**(Башы 1-се биттә).**

Гәзиттең эстәлегенә килгәндә, барыһы менән дә ризамын. "Өфө башҡорто" тигән рубрика асып, баш ҡалала тыуып үҫкән шәхестәр менән таныштыра башлауығыҙ ҙа яҡшы булды. Халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкованы Өфө башҡорто булараҡ уҡып, бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән таныштыҡ. Гәзиттә булған бар рубрикалар менән ризамын. Йәмилә Шәрәфетдинова, Вәсилә Әбдрәхимова, Фәүзиә Мөхәмәтшиналар төҙөгән башватҡыстарҙы ла яратып сисәм. Улар аша бик күп боронғо башҡорт һүҙҙәрен белеп ҡалдым. Киндер ыштан, бәктиһәң, утысма икән. Ул һүҙҙе мин тәүгә ишетәм. Ул һүҙҙе мин сисә алмағайным, яуаптар баҫылғас ҡына яҙып ҡуйҙым.

"Киске Өфө" милләт, ил яҙмышы өсөн борсолоп, халҡыбыҙға оран һала, әүҙемдәрҙе үҙенең геройҙары һымаҡ фиҙаҡәр булырға, яныулыш һуҡмаҡҡа ығыбырак барыуҫы йәштәрҙе аҡылға килергә, тормош мәшәҡәттәренә батып, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән, ғәмһеҙлек ҡабырсағына бикләнгән замандаштарҙы уйландырырға саҡыра. Башҡорт халҡының, ҡала башҡорттарының мәҙәниләген белдергән үҙенсәлекле бер күрһәткес булыуға дәғүә итерлек гәзитебеҙ оҙон ғүмерле булһын, тип теләйем.

Әйткәндәй, гәзит уҡыусы белә торғандыр, "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, теләһәң, квитанцияңды ебәреп, бынамын тигән китаптарға эйә булаһың. Теләһәң, тыуған көнөңдә гәзит биттәрендә редакциянан ҡотлау сәләме ҡабул итеү мөмкинлеге лә бар. Күптән түгел редакциянан миңә тип исемләнгән бүләк-китап килеп етте. Мин ул китапты оло кинәнес менән уҡып сыҡтым. Гүзәл Ситдиҡованың "Йәннәт баҡсаһында" исемле йыйынтығында һүҙ авторҙың Мәккә ҡалаһына хаж сәфәре ҡылыу тураһында бара. Гүзәл Ситдиҡова сәйәхәтен шул тиклем тулы, йәнле, мауыҡтырғыс итеп тасуирлай - уны уҡығанда үҙең хаж ҡылғандай, изге урындарҙа үҙең йөрөгәндәй булаһың. Бына шулай, "Киске Өфө"нө, башҡа баҫмаларыбыҙҙы ла уҡып, Башҡортостандың мәғлүмәт киңлектәрендә "колас ташлап" йөҙәм, бөтөн яҡшы хәбәрҙәр менән дә ваҡытында танышып барырға, мәғлүмәтлелегемде арттырып барырға тырышам. Башҡаларҙы ла миңә ҡушылырға саҡырам.

**Миңлегөл УСМАНОВА.**
**Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Тормошта көлкө тыуҙырған ниндәй күренештәр, парадокстар хаҡында һөйләр инегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Венер ИСХАҠОВ, журналист:*** Ҡыҙҙарыбыҙ балалар баҡсаһына йөрөй башлағас булған бер хәл иҫкә төштө. Тәркөм тәрбиәсеһе ҡатынымдан республикала билдәле генә бер ғалимә, тел белгесе ханымдың башҡорт телен өйрәнеү буйынса методик ҡулланма-дәреслеген табып биреүебеҙҙе үтенгән. "Ирегеҙ матбуғатта эшләгәс, уға был дәреслекте йә уның авторын эҙләп табыуы ҡыйын булмаҫ, беҙ һәр хәлдә таба алманыҡ",- ти икән тәрбиәсе. Эйе, башҡорт телен өйрәтеү буйынса был ҡулланманы ла, уның авторын да яҡшы беләм, Матбуғат йортонда ла йыш осратам уны: балаларға башҡорт телен өйрәтеү ысулдары хаҡында мәҡәләләрен баҫтыра. Китап магазиндарынан әлеге дәреслекте таба алмағас, ғалимәнең өй телефонын алып, үҙенә шылтыратырға булдым."Һаумыһығыҙ!" тиеүемә: "Здрасте, мамы нет дома",- тип, һөйләшеп бөтөр-бөтмәҫтән был үҫмер трубканы ташланы. Бәлки, үҙен тап итермен, тип, иртәгәһенә тағы шылтыратам, ләкин был юлы ҡыҙы яуап бирҙе: "Здрасте, мама в командировке, будет через три дня". Өс көн дә үтеп китте, ләкин минең башҡаса был телефон һандарын йыйырға ҡулым күтәрелмәне...

***Фәзиз ЙОСОПОВ, БР Стратегик эҙләнеүҙәр институтының матбуғат хеҙмәткәре:*** Кешеләр араһында мине көлдөргәнсе аптыратыусылар, улар - мыжыҡтар һәм тәнҡитләүселәр. Ундай кешеләрҙең тормошо һис бөтмәй торған парадокс инде ул. Бәрәүҙе беләм: ғүмер буйы тормошта булған барлыҡ кире күренештәрҙә етәкселәрҙе генә ғәйепләп, уларҙы ғына тәнҡитләп йөрөнө-йөрөнө лә, берҙән-бер көн килеп үҙен юғарыға урлаткәйнеләр, бюрократлыҡта барыһынан да уҙҙырып ебәрҙе.

Һәм тағы. Ауылдарҙа үҙ көсө, үҙ йүнселлеге менән мал табып, эшҡыуарлыҡ, фермерлыҡ, кәсепселек менән шөғөлләнгәндәр ҙә, ғәҙәттә, ауылдаштарының ҡаты тәнҡит утына эләгеүсән. Тәнҡитләүселәр, әлбиттә, ҡулынан эш килмәгәндәр йә эшләргә теләмәүселәр. Шундайҙарҙың берәүһенең күршеһе байып китте икән, ти. Ул мотлаҡ: "Күршем хәйләкәр, шуға бай, ә беҙ дөрөҫ йәшәйбеҙ, шуға байымайбыҙ", - тиәсәк. Бына шундай, ни байый алмай, байыһа ла, уның ҡәҙерен белмәй, ә ҡәҙерен белгәндәрҙе тәнҡитләй-тәнҡитләй йәшәгәндәр бар инде томошобоҙҙа...

***Әмир ҒҮМӘРОВ, яҙыусы:*** Көлкөлө, һәр төрлө парадоксаль хәлдәр һәр саҡ осрап тора тормошта, тик ана шуларҙы күрә, баһалай белергә лә кәрәк, миненсә. Ә ҡайһы ваҡыт ниндәйҙер күңелһеҙ хәлде көлкөгә һабыштырып, ҡыйынлыҡтан, ниндәйҙер проблеманан ҡотолорға ла була. Ошоға бәйле йәш саҡтағы бер ваҡиға иҫкә төштө. Төндә Өфө буйлап йәйәү ҡайтып киләм, транспорт туҡтап бөткән. Бер заман мине арттан милиция машинаһы ҡыуып етеп, ултыртып алдылар ҙа, исем-фамилияны һорашып, протокол төҙөй ҙә башланылар. Мәғлүмәттәрҙе тултырып бөткәс, береһе, күпме миҡдарҙа эскәненде үҙ ҡулдарың менән яҙ, тип ручка биргәйне, мин тот та 99,9 грамм тип яҙ ҙа ҡуй. Бына тегеләр шарҡылдашып көлөшә башламаһынмы! Шулай итеп, юмор менән милиционер егеттәрҙең күңелдәрен йомшартып, көсөргәнешле хәлде уйын-көлкөгә бороп ебәрә алдым. Улар ҙа кеше бит, юморҙы баһалай беләләр: протоколды йыртып ташланылар ҙа, үҙемде машиналарында өйөмә тиклем үк килтереп төшөрөп киттеләр. Көлкөлө йор һүҙ, килеп тыуған хәл-ваҡиғаға парадоксаль йүнәлеш биреп ебәреү, әйтеүемсә, һәр ваҡыт үҙеңә ҡарата эргәтирәләгеләрҙең яҡшы, эскерһеҙ мөнәсәбәтен булдырырға ярҙам итә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# КӨЛӨП ЙӘШӘЙЕК!



**Тормошта көлкөлө хәлдәр йыш була. Ундай осраҡта хатта етди урындарҙа ултырған бик етди кешеләр ҙә көлмәй ҡала алмай. Эйе, көлөү ул Хоҙай тарафынан бөтә кешегә лә бирелгән күркәм сифат. Мин үҙем, шөкөр тип әйтәм, был илаһи сифаттан бер ҡасан да бер ерҙә лә айырылманым.**

Былтыр Грецияла яҙыусыларҙың халыҡ-ара йыйылышында ҡатнашырға тура килгәйне. Бына шунда донъяның төрлө тарафынан йыйылған ҡәләм оҫталары береһенән-береһе уҙҙырып етди сығыштар яһаны. Әҙәбиәт белгестәренең докладтарын ябай кешеләр аңларлыҡ та түгел: "Константинос Кавафис шиғриәтендә еҫтәр репрезентацияһы феномены", "Рәсәйҙәрҙең көндәлек юмористик дискурсында грек милли-менталь үҙләштереү үҙенсәлектәре"... Ниһайәт, миңә сират етте. Етди докладымдың темаһын иғлан итәм: "Бөйөк урыҫ яҙыусыларының "Геродот есе килгән" башҡорттарҙа ҡунаҡ булғаны". Шулай тинем дә, туҡтап ҡалдым. Залға ҡарайым. Күрәм: тыңлаусыларҙа (һәм тыңламаусыларҙа ла) ҡыҙыҡһыныу уянды. "Кара һин уны, ниндәйҙер бер башҡорт Геродотҡа үрелә түгелме?" Ә Канаданан килгән текә ханым миңә прәме тишерҙәй булып ҡарай. Түҙмәнем, әйттем үҙенә:

- Мине еҫкәргә кәрәкмәй! Башҡорттарҙан Геродот еҫе килә, тип мин түгел, Толстой әйткән.

Был һүҙҙәрҙән һуң бөтәһе лә, хатта теге текә ханым да, көлөп ебәрҙеләр. Әммә иң ныҡ көлгәне "Мәҙәниәттәр диалогы - XXI быуат" грузин ассоциацияһы президенты профессор Валерий Асатиани булғандыр. Ул классик филология һәм византинистика докторы, Шеварднадзе заманында Грузияның мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарған. Аҙаҡ минең был элекке ватандашым, әлеге рухташым, ҡулымды ҡыҫып:

- Иң шәп доклад - һинеке! - тине. - Көлөп-йылмайып ҡына башҡорттарҙың кем икәнен бөтә донъяға аңлаттың...

Ә мин иһә көлә белгән кешеләрҙе яратам. Кемдең кем булыуына ҡарамаҫтан. Бергәләп көләйек, дуҫтар!

**Марсель СӘЛИМОВ,**
**яҙыусы-сатирик.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Хөкүмәте Президиумы ултырышында 2017 йылда республика ҡаҙнаһынан муниципалитеттарға ҡала парктарын төҙекләндереүгә ярҙам итеү өсөн субсидиялар биреү һәм бүлеү ҡағиҙәләре раҫланды.Был маҡсатҡа федераль бюджеттан 18,7 миллион һум һәм республиканан 3,8 миллион һум бүлenә. Субсидиялар Бәләбәй, Күмертау, Белорет, Учалы һәм Благовещен ҡалаларындағы парктарҙы төҙекләндереүгә йүнәлтеләсәк.

✓Башҡортостандың Урал аръяғында аграрийҙар ҡаты бойҙайҙың майҙандарын 40 мең гектарға тиклем арттырырға ниәтләй - уға хаҡ юғарыраҡ. Быйыл игендең һәм ҡуҙаҡлыларҙың дөйөм майҙаны 3400 гектарға артасаҡ, дөйөм сәсеү майҙаны 386 мең гектар тәшкил итәсәк - уҙған йылға ҡарағанда 2 процентҡа күберәк. Ейәнсура районында Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Ирек Мөхәмәтдинов етәкселегендә үткән ауыл хужалығы конференцияһында ошо хаҡта һүҙ барҙы.

✓Яҙғы саҡырылышта Башҡортостандан 5100-ҙән ашыу кеше Рәсәй армияһы сафын тулыландырасаҡ. Көҙгө саҡырылышта Башҡортостандан 5300-гә яҡын егет хәрби хеҙмәткә алынды, тип аңлатма бирҙеләр республика хәрби комиссариатында. Шуларҙың 3100 самаһы - Ҡоро ер ғәскәрҙәренә, 320-нән ашыуы - Хәрби диңгеҙ флотына, 370 самаһы - Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәренә, 70-тән ашыуы - Һауа десанты ғәскәрҙәренә, 490-ға яҡыны Милли гвардияға һәм башҡа ғәскәрҙәргә оҙатылды.

✓Һауыҡтырыу туризмы ассоциацияһы һәм RAEX рейтинг агентлығы "Рәсәйҙең 100 шифаханаһы" инвестиция йәлеп итеү рейтингын әҙерләне. Эксперттар билдәләүенсә, үҫеш динамикаһы буйынса һаулыҡ йорттары иҡтисадтың күп кенә тармаҡтарын уҙып китә. "Янғантау" шифаханаһы инвестиция йәлеп итеү рейтингында беренсе урында килә. "Красноусол" - 16-сы, "Йәшел сауҡалыҡ" - 41-се, "Йоматау" - 54-се, "Яҡтыкүл" 60-сы урынды биләй.

✓Башҡортостан юлдаш телеканалына Шамил Ишемйәров етәкселек итәсәк. Үҙгәрештәр холдингҡа Рөстәм Зарафутдиновты генераль директор итеп тәғәйенләүгә бәйле. Уның килеүе менән телевидениеның элекке директоры Азамат Әлмөхәмәтов вазифаһынан китте. Шамил Ишемйәров быға тиклем мәғлүмәт программаларының баш мөхәррире булып эшләгән. Каналдың яңылыҡтар хеҙмәтен журналист Альбина Хәйруллина етәкләйәсәк.

✓ *Бөтөн ерҙә ҡот осҡос күренеш - суп-сар "сәскә атыуын" күрерһегеҙ. Апрель өмәләрендә ҡатнашып, йәшәгән еребеҙҙе булһа ла таҙартырға тырышайыҡ, юғиһә, Еребеҙ именлегенә янаусы факторҙар былай ҙа күп бөгөн.*



БЫЛ АЙҘА...

**Апрель, йәғни халҡыбыҙ телендә алағарай, Көлкө көнө (1) һәм ҡоштар һайрауынан (1-е шулай уҡ Халыҡ-ара ҡоштар көнө) башланып китһә лә, күңелгә уй, хатта хәүеф-хәтәр һалырлыҡ етди көндәрҙән дә тора. Иң ныҡ борсоу һалғаны - яҙғы ташҡын. Гидрометеорологтар фаразлауынса, быйыл ул ул йылдағынан байтаҡҡа ярһыуыраҡ, хәтәрерәк булмаҡсы. Шуға күрә, йыл да тип әйтерлек һыу аҫтында ҡалыусы райондарҙа халыҡ алдан әҙерлек күреп, мал-ҡаралтыһын хәүефһеҙ урынға күсерә башлаһын ине. Юғиһә, күп осраҡтағыса, ташҡын уларҙы төнгө йоҡоларынан уятып килеп баҫҡансы иҫтәре китмәгән кешеләр ҙа бар бит. Аҙаҡ уларға һыйыры, эте-суты менән муйындан һыу кисеп, йөҙөп йөрөргә тура килә һәм, ахыр сиктә, ҡазаланған өсөн нишләптер йә хакимиәт, йә хөкүмәт ғәйепле булып сыға...**

# АЛДАН ХӘСТӘРЛӘ -

## ташҡын йоҡонда килеп баҫмаһын!



Ай башында Геологтар, Халыҡтар берләшеүе һәм Халыҡ-ара балалар китабы көндәрен (2) билдәләп үтербеҙ. Ошо уңайҙан совет осоронда фиҙаҡәр хеҙмәттәре менән киң билдәле булған талантлы, эшһөйәр геологтарыбыҙҙы телгә алмау яҙыҡ булыр. Заманында Санкт-Петербургтың үҙендә Тау институты астырған башҡорт рудасыһы һәм йүнсеҙ Исмәғил Тасимовтың эшен дауам итеүсе тип хаҡлы рәүештә Силәбе башҡорто, нефть ятҡылыҡтары геологияһы һәм геология-минералогия фәндәре буйынса милләтебеҙҙән беренсе профессор, фән докторы Ҡадир Тимерғазиндың исемен атайҙар. Тап уның етәкселегендә Өфөлә СССР Фәндәр академияһының Тау-геология, хәҙерге Геология ғилми-тикшеренеү институты асыла. Ғалим-геолог Туймазы, Баулы, Шкапов, Серафимовка нефть ятҡылыҡтарын асыуҙа ҡатнаша. Абруйлы, талантлы ойоштороусы булған ғалим 1959-1963 йылдарҙа БАССР Юғары Советы Рәйесе вазифаһын да башҡара хатта. Легендар геологтарыбыҙҙан тағы ла бер үк ваҡытта яҙыусы ла, журналист та булған һоҡланғыс шәхестәребеҙ Минләхмәт Моҡатанов менән Басир Мәһәҙиевты нисек иҫкә алмайһың! Ә бөгөнгө көндә беҙҙең арала йәшәгән замандашыбыҙ - Рәсәй Тау фәндәре академигы, техник фәндәр докторы, шулай уҡ журналист һәм яҙыусы Эрнст Юлбарисов "Киске Өфө" редакцияһының йыш, ҡәҙерле ҡунағы. Геологтар көнө менән Һеҙҙе, Эрнст Мирсаяф улы!

Ошо уҡ датаға тәғәйенләнгән Халыҡтар берҙәмлеге һәм Халыҡ-ара балалар китабы көндәре лә тауыш-тынһыҙ ғына үтеп китмәҫ, моғайын. Тик шуныһы ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: китапханаға йөрөүсе балалар ҡалдымы икән бөгөн? Әллә яҙыусыларыбыҙ ҙа онлайн режимда ижад итергә һәм уҡыусылары менән интернет аша аралашырға өйрәнеп алдымы?

...Бынан 28 йыл элек 7 апрель көнө Норвегия диңгеҙендә Советтар Союзының "Комсомолец" К-278 һыу аҫты кәмәһендә янғын сығып китеү сәбәпле, экипаждағы 69 кешенең 42-һе һәләк була. Был фажиғәнән һуң 11 йыл үткәс, 12 августа Баренц диңгеҙендә "Курск" К-141 атом һыу аҫты кәмәһендәге һәләкәттән иһә экипаждағы 118 кешенең береһе лә иҫән ҡалмай... Шуларҙың дүртәүһе - Башҡортостан егеттәре: Фәнис Ишморатов, Наил Хафизов, Салауат Янсапов һәм Роберт Гесслер. 7 апрель - һыу аҫты кәмәһендә хеҙмәт иткән һәм һәләк булған моряктарҙы иҫкә алыу көнө.

Ошо уҡ көн Бөтөн донъя сәләмәтлек көнө тип иғлан ителгән. Быйыл ул "Депрессия: әйҙә, һөйләшәйек" тигән девиз менән барасаҡ һәм һаулыҡ һаҡлау буйынса төрлө сараларға бай ғына булмаҡсы.

Быйыл Башҡортостандың 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһын әҙерләп фронтҡа оҙатыуына теүәл 75 йыл тула (7). Был датаны республикабыҙ йәмәғәтселеге ниндәй саралар менән ҡаршыларға йыйына икән? Үкенескә, был турала бер ниндәй хәбәр ҙә ишетелмәй әле. Ә ниңә, Башҡортостанда ил Президенты Владимир Путин юғары баһалаған патриотик тойғоларҙы йәштәр һәм уҡыусы балалар аңына еткереүҙең бик урынлы һәм уңай ысулдарының береһе булараҡ файҙаланмаҫҡа был көндө? Әллә беҙҙең легендар атлы яугирҙарыбыҙ менән Путин ғына ғорурланырға тейешме?..

Космонавтика көнөнә (12) ҡағылышлы һүҙ: уның бөгөнгөһөнә ҡарап, Королев менән Гагарин гәрлектәренә сыҙамаҫ ине, тип яҙалар интернетта. Рәсәй космонавтикаһының абруйы төшөүгә Роскосмос тирәһендәге яңъялдар, уның топ-менеджерҙарының коррупция һаҙлығына батыуы сәбәпселәр. РФ Иҫәп палатаһы етәксеһе Татьяна Голикова әйтеүенсә, һуңғы йылдарҙа иң ҙур күләмдә финанс боҙоуҙар тап ошо корпорация өлөшөнә төшә.

15 апрель Экологик белем менән Бөтөн донъя мәҙәниәт көндәренең тап килеүе лә юҡҡа түгелдер һымаҡ. Кешелектең экологик белем һәм мәҙәнилек кимәленә ишарамы инде былныһы? Ахыры... Юғиһә бит был яҙ етер-етмәҫ, умырзая баш ҡалҡытыу менән уларҙы ҡосаҡ-ҡосаҡ йолҡоп, үҙ тауарылай, менән һайын һатып тороусыларҙан башлана ла. Умырзая көнө (19), шулай итеп, тәбиғәт ҡоротоусы ҡомһоҙҙарҙың аҡса эшләү көнөнә әүерелә. Шуларҙан һатып алып тороусыһын әйт әле һин... Экология, мәҙәнилек хаҡындағы һүҙ үҙенән-үҙе Халыҡ-ара Ер көнө (22) темаһына барып ялғана, сөнки экологияны һаҡлап, беҙ йыһандан тәүге космонавт күреп һоҡланған зәңгәр һәм бәләкәй генә планетабыҙҙы ла ҡурсыйбыҙ. Быны өсөн әллә ҡайҙа алыҫ йөрөргә лә, ниндәйҙер бөйөк эштәр хаҡында хыялланып аҙапланыу ҙа кәрәкмәй. Баш ҡалабыҙ урамдарының ҡарҙан әрселгән урындарына күҙ һалыу ҙа етә: бөтөн ерҙә ҡот осҡос күренеш - суп-сар "сәскә атыуын" күрерһегеҙ. Апрель өмәләрендә (8 апрель - 13 май) ҡатнашып, йәшәгән еребеҙҙе булһа ла таҙартырға тырышайыҡ, юғиһә, Еребеҙ именлегенә янаусы факторҙар былай ҙа күп бөгөн. Әйтәйек, планетала химия хәүефһеҙлеге (28) өсөн көрәш иң мөһимелер ҙә, бәлки. Кешелек аҡылы ижад иткән фәнни ҡаҙаныштарҙың шунда уҡ кешелеккә ҡаршы үлемесле ҡоралға әүерелеүе кеүек заман парадокстарынан тора бөгөн тормош асылы. Шулай ҙа һүҙҙе күңеллерәк итеп тамамлағы килә. Быны өсөн сәбәп тә бар: 29 апрель - Халыҡ-ара бейеү көнө. Ә быуа был йәһәттән хаҡлы рәүештә ғорурлана алабыҙ, сөнки Башҡортостан гәжәп һәм һоҡландырғыс таланттар - оҫта бейеүселәр төйәге.

**Алағарай юбилярҙары:**

**1** - Шағир, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Хисмәт Юлдашевҡа** - 60 йәш (1957).

**3** - Композитор, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Юлай Үҙәнбаевҡа** - 50 йәш (1967).

**4** - Офтальмолог, БР Фәндәр академияһы Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты директоры, медицина фәндәре докторы, профессор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Мөхәррәм Бикбовҡа** - 60 йәш (1957).

**11** - График, рәссам, Башҡортостанда һынлы сәнғәткә нигеҙ һалыусыларҙың береһе **Ҡасим Дәүләткилдиевтың** тыуыуына - 130 йыл (1887-1947).

**14** - Хирург, йәмәғәт эшмәкәре, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Марс Юлдашевҡа** - 80 йәш (1937).

**20** - Дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Фәрит Ғәбитовҡа** - 80 йәш (1937).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓20-26 апрелдә Өфөлә гәзәттәге "Театр яҙы" республика фестивале уҙа. Фестивалдә төрлө жанрҙарҙа 15 спектакль күрһәтеләсәк. Программаға тәүгә опера - Заһир Исмәғилевтың "Салауат Юлаев" спектакле "Беҙҙекеләр" вербатимы, А. Кортнев һәм С. Чекрыжовтың "Аҡбуҙат. Аҡ ат, алтын ҡош" башҡорт эпосы мотивтары буйынса фантазия инде. Фестивалдең төп программаһында Башҡортостандың бөтә профессиональ театр коллективтары ҡатнаша.

✓Республиканың баш ҡалаһында һыу баҫыу ихтималлығы булған урындарҙа иҫкәртеү рейдтары уҙғарыла. Һуҙ тәү сиратта Затон, Нижегородка, Кооператив ялан, Кузнецов затоны, Максимовка, шулай уҡ Дим районының баҡсасылыҡ ширҡәттәре хаҡында бара. Хәбәр итеүҙәренсә, рейдтар барышында 696 торлаҡ һәм 79 баҡса йорттары тикшерелгән. Йорт хужаларына һыу баҫыу ихтималлығы булған ерҙән эвакуациялау ҡағиҙәләре яҙылған листовкалар таратылған. Бөтәһе 1800-гә яҡын кешегә инструкция үткәрелгән.

✓"Өфө-Ладья" фестивале сиктәрендә сәнғәт һәм дизайнерҙар кейем-һалымы һәм биҙәүестәр күргәҙмәһе уҙҙы. "Стихия" агентлығы моделдәре Александра Хисаметдинованың дизайнер түшелдеректәрен күрһәтте. Этник стилдә эшләнгән биҙәүестәр модельер Сәймә Хәсәнова теккән күлдәктәр менән бергә иҫ киткес күренде. Бер үк ваҡытта сәхнә янында башҡорт түшелдеректәрен һәм баш кейемдәрҙе эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе барҙы.

✓Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Игорь Паньшин Волга буйы федераль округының Рәсәй Геройы А.В. Доставалов исемендәге Башҡорт кадет корпусында булды һәм уҡытыусылар коллективын һәм ата-әсәләр комитетын белем биреү учреждениеһының яңы директоры менән таныштырҙы. Ул - Виталий Рогач, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Баш федераль инспекторҙың матбуғат хеҙмәтендә.

✓Өфөләрҙә эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре буйынса сираттағы бушлай курстар-консультацияларға саҡыралар. Уларҙы баш ҡаланың Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм ярҙам итеү фонды менән берлектә Халыҡ мәшғүллеге үҙәге ойоштора. Дәрестәр 3 апрелдән 14-нә ҡәҙәр уҙа. Тулыраҡ мәғлүмәт менән Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы сайтында танышырға мөмкин.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘҘЕРЛӘНӘБЕҘ:

## серәкәйҙәргә һәм…

**Ҡала халҡын талпан энцефалиты, малярия йәки "сысҡан" биҙгәге эпидемияһынан һаҡлап алып ҡалыу өсөн республиканың баш ҡалаһында урман-парк зоналарын, һыу яҭҡылыҡтарын эшкәртеү ҡаралған.**

Белгестәр мәғлүмәттәре буйынса, ошо вируслы ауырыуҙарҙың иң юғары нөктәһе яҙ аҙағына - йәй башына тура килә. Талпандарҙан, ғәҙәттә, тупраҡты, үләнде һәм ҡыуаҡлыҡтарҙы, серәкәйҙәрҙән ҡалалағы һыу яҭҡылыҡтарын эшкәртәләр. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, яҙғы эпидемия миҙгелендә санитар-эпидемиологик именлекте һаҡлау өсөн Өфөлә 10400 гектар майҙанда дератизация саралары (кимереүселәрҙе юҡ итеү буйынса комплекслы саралар), 555 гектар ерҙә акарицид ярҙамында эшкәртеү (талпандарҙы юҡ итеүгә йәки барлыҡҡа килеүен иҫкәртеүгә йүнәлтелгән махсус саралар) һәм 468 гектар майҙанда һыу яҭҡылыҡтары серәкәйҙәре ҡарышлауыҡтарынан ларвицид ярҙамында эшкәртеү ҡаралған. Ларвицид ярҙамында эшкәртеү - махсус микробиологик иретмә, ул серәкәйҙәрҙең ҡарышлауыҡтарын ғына юҡ итә, кеше өсөн хәүефһеҙ. Уҙған йыл менән сағыштырғанда эшкәртеү күләмдәре - 360 гектарға, акарицид ярҙамында эшкәртеү күләмдәре 215 гектарға күберәк. Ошо эштәрҙе финанслауҙың дөйөм күләме 6 миллион һум тәшкил итә. Бөгөнгә бөтә әҙерлек эштәре башҡарылған, шул иҫәптән кәрәкле саралар менән тәьмин итеүгә килешеүҙәр төҙөлгән, белгестәр, техника һәм ҡорамалдар сараларҙы үткәреүгә тулыһынса әҙер.

## …ташҡынға ҡаршы

**Ағиҙел йылғаһы бассейнындағы күпселек йылғаларҙа һыуҙың максималь кимәле нормаға ярашлы һәм унан 20-70 сантиметрға юғарыраҡ булыуы көтөлә.**

"Йылғаларҙың ваҡытында, уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә ярашлы асылыуы көтөлә. Өфөлә йылғалар - 6-12 апрелдә, Башҡортостанда апрелдең беренсе декадаһы аҙағында һәм икенсе декадаһы урталарында асыла, - тип хәбәр итте матбуғат конференцияһында республиканың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығы начальнигы Вилора Горохольская. - Ғәҙәттә, һыу кимәле апрель аҙағында - май баштарында иң юғары күрһәткескә етә. Яҡынса алғанда, 27 апрелдән 5 майға тиклем, һауа торошона ҡарап". Башгидромет башлығы һүҙҙәренсә, Өфө һыу посы эргәһендә Ағиҙелдең максималь кимәле 750-850 сантиметр булыр тип көҙаллана. "Бурысыбыҙ - анығ фараздарға ярашлы ташҡынды хәүефһеҙ үткәреүҙе тәьмин итеү. Бында халыҡтың уяулығын баҫырға ярамай. "Ҙур һыу"ға әҙер булырға һәм тейешле саралар күрергә кәрәк. Шуға ҡарамаҫтан, бер кемде лә ҡурҡытырға йыйынмайбыҙ. Объектив баһалайбыҙ, яҙғы ташҡынға әҙерләнәбеҙ һәм халыҡты яҡлау өсөн барыһын да эшләйбеҙ", - тип белдерҙе Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Марат Мәһәҙиев.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# СИБАЙҘАР ҠОР ЙЫЙҘЫ

**Ошо көндәрҙә Сибай институтында "Башҡортостан - үҫеш территорияһы: эшҡыуарлыҡ, экология, тел һәм мәҙәниәт" тип аталған Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙҙы.**

- Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты менән берлектә үткәрелгән сараларҙа беҙ, беренсе сиратта, тел мәсьәләләренә туҡталабыҙ, - тине Сибай институты директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов сараның пленар өлөшөн асып. - Бер нисә йыл элек дөйөм белем биреү учреждениеларында әсә телен, дәүләт теле булараҡ башҡорт телен уҡытыу мәсьәләһе хәл ителгән кеүек ине. Әммә, Федераль дәүләт белем биреү стандарты үҙгәреүгә һылтанып, күп кенә мәктәптәр башҡорт теле дәрестәренә сәғәттәр бүлмәй башланы. Улайға китһә, юғары белем биреү өлкәһендә лә Федераль дәүләт белем биреү стандарты үҙгәрҙе, шулай ҙа беҙ Сибай институтында эшләп килгән барлыҡ факультеттарҙа ла башҡорт теле дәрестәрен һаҡлап ҡалыуға өлгәштек. Дәрестәрҙә студенттар башҡорт халҡының мәҙәниәте, этнографияһы, арҙаҡлы шәхестәре менән таныша.

Һәм тағы. Үкенескә ҡаршы, бөгөн күп кенә ир-егеттәребеҙ эш юҡлыҡтан сит яҡтарға сығып китергә мәжбүр. Һөҙөмтәлә, балалар атай тәрбиәһе күрмәй үҫә, ғаиләләрҙә атай абруйы төшә. Был ҡайһы саҡ ғаиләләрҙең тарҡалыуына ла килтерә. Тимәк, күп кенә проблемаларҙы хәл итеү өсөн эш урындары булдырыу кәрәк. Бөгөн бөтә ил бәләкәй эшҡыуарлыҡтың отошло булыуын билдәләй. Ошо йәһәттән, беҙ бөгөн туризмды үҫтереүгә айырыуса иғтибар итергә бурыслыбыҙ. Тыуған Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл тәбиғәте һәр кемдә һоҡланыу уята, шифалы, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлегенең баһаһы сикһеҙ. Тимәк, туризмды йәйелдереү - беҙҙең республика өсөн иң ҡулай бизнес. Шул уҡ ваҡытта халыҡты эш менән тәьмин итеү асыла ла. Шулай уҡ, умартасылыҡ, йылҡысылыҡ, баҡсасылыҡ эшен киң йәйелдереү, дарыу үләндәре әҙерләү һәм һатыуға сығарыу буйынса ла эшләйһе эштәр етерлек...

Зиннур Ғөбәйҙулла улының сығышы конференцияла һөйләнәсәк сығыштарҙың төп темаһына йүнәлеш бирҙе: экология, тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәй генә эшҡыуарлыҡты үҫтереү, матди хәлебеҙҙе нығытыу, телебеҙҙе һәм мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау өлкәһендәге эштәрҙе әүҙемләштереү.

Артабан һүҙ тотҡан Сибай ҡала хакимиәте башлығы Хәлит Хәмзә улы Сөләймәнов та ошо юҫыҡта дауам итте: "Тирә-яҡ мөхитте, урман-ҡырҙарыбыҙҙы, йылғакүлдәребеҙҙе ҡурсалау - беҙҙең төп бурыс һанала. Экологияны һаҡлау буйынса эшләнек һәм эшләйәсәкбеҙ. Заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, элек беҙ полиэтилен, пластмасса тигән нәмәне белмәнек. Магазинға ептән үрелгән сетка тотоп барабыҙ ҙа, һатып алған аҙыҡ-түлекте ябай ҡағыҙға төрөп алып ҡайта торғайныҡ. Ҡағыҙҙың нимәһе яҡшы, уны яғып була йәки сүплеккә түкһәң, үҙе ятып серей. Ә хәҙер магазин кәштәләрендә ятҡан һәр тауар полиэтиленға төрөлгән, пластик шешәләрҙең күплеге тураһында әйтерлек тә түгел. Был материалдар экологияға ҙур зыян килтерә. Ә производствоны үҫтереүгә килгәндә, шуны әйтер инем: төбәктә электән ауыл хужалығы менән күпләп шөғөлләнделәр һәм ҡасандыр Сибайҙа гөрләп эшләп торған Һөт-консерва комбинаты, элеватор һәм ит комбинаты ауыл хужалығы продукцияһын ҡабул итеүгә һәм эшкәртеүгә иҫәпләнгән булған. Мәҫәлән, Сибай элеваторы бер көндә 180 мең тонна иген ҡабул итергә әҙер. Тәүлегенә 300 тонна он етештерерлек ҡеүәте бар. Әммә Урал арьяғынан ашлыҡ килтереүселәрҙең һаны 5 процент ҡына тәшкил итә, ҡалғандары Ырымбур һәм башҡа өлкәләрҙән килеүселәр. Урал арьяғы ит комбинаты тәүлегенә 8 тонна колбаса ризыҡтары етештерә. Әммә унда Урал арьяғының ите юҡ. Сеймалдың күпселеген ситтән һатып алалар. Һөт-консерва комбинаты көнөнә 100 тонна һөт ҡабул итһә, эшләр ине. Һөт булмағас, ул ябылыуға дусар булған. Күреүегеҙсә, производство тулы ҡеүәтенә эшләһен өсөн төбәктә ауыл хужалығын үҫтерергә, сеймалды ҡабул итеүҙе ойоштороrға кәрәк".

Артабанғы сығыш яһаусылар - Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғолов та эшҡыуарлыҡты үҫтереү, экологияны һаҡлау мәсьәләләренә туҡталды, быйыл республикала "Халыҡ-ара бәйләнеш теле булараҡ башҡорт теленең әһәмиәте" темаһы буйынса форум буласағы хаҡында хәбәр итте. "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева башҡорт ғаиләһенең статусын күтәрергә, халҡыбыҙҙың аңын уятырға һәм балаларыбыҙға тарихты өйрәтергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Билдәле ғалимдар Йәлил Һөйөндөков һәм Альфред Мөхәмәтйәровтың Урал арьяғының ҡаҙылма байлыҡтары һәм эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә бәйле докладтары бик тә урынлы булды. Филология фәндәре докторы Розалия Солтангәрәева халҡыбыҙға мөрәжәғәтен ҡобайыр менән еткерҙе. Социология фәндәре кандидаты Тимур Мөхтәровтың "Башҡорт халҡының тел ассимиляцияһы процестары" темаһына ҡоролған докладында бик етди мәсьәлә күтәрелде. Екатеринбург ҡалаһының Урал дәүләт тау университеты доценты Ләлә Ғәйнулла ҡыҙы Йосопова үҙенең телмәрендә нисек итеп башҡа төбәктә башҡорт телен һәм мәҙәниәтен һаҡлап ҡалыу тураһында һөйләне. Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығының Сибай төбәк комитеты рәйесе Гөлнар Фазылйән ҡыҙы Ноғоманова Урал арьяғындағы төп экологик проблемалар һәм уларҙы юҡ итеү юлдары менән уртаҡлашты. Артабан конференция эше секцияларҙа дауам итте, һәр күтәрелгән тема ентекләп тикшерелде, улар буйынса резолюция ҡабул ителде.



**Альбина ҠОҘАШЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Анна Кузнецова Рәсәй Федерацияһы Һаулыҡ һаҡлау министрлығына ата-әсәләр балаларҙа туберкулез ауырыуын билдәләү алымын үҙҙәре һайлай алһын өсөн Манту реакцияһы алмашын билдәләргә тәҡдим итте. Уның әйтеүе буйынса, Манту реакцияһының алмашы бар: балалар ҡан тапшыра йәки икенсәләй был анализдарҙы үтә ала.

✓2017 йылдың аҙағына Башҡортостан халҡының Өфөгә килмәй генә белгестәрҙән диагноз алыу мөмкинлеге барлыҡҡа киләсәк. Ул Ситтән тороп консультациялар биреү үҙәге ярҙамында ғәмәлгә ашырыласаҡ. Февралдә яңы технологияны республиканың 17 медицина учреждениеһы һынаны, төрлө йүнәлештәр буйынса 134 телеконсультация уҙғарылды. Быйыл төбәк Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Башҡортостандың бөтә медицина учреждениеларына ошо функцияны таратыуҙы тамамларға ниәтләй.

✓Өфө властары крематорийҙы, алдан уйланылғанса, ҡаланың көнбайышында түгел, ә төньяғында - сәнәғәт өлөшөндә төҙөргә мөмкин тигән фекер менән риза. Әле ҡаланың төньяғында крематорий төҙөү мөмкинлеге ҡарала, документтар әҙерләү бара.

✓Башҡортостандың Милли музейында "Бөйөк Ватан һуғышы легендаһы..." күргәҙмәһе асылды. Ул Ленин, Ҡыҙыл байраҡ ордены, II дәрәжә Суворов һәм II дәрәжә Кутузов орденлы 16-сы (112-се Башҡорт) гвардия кавалерия Чернигов дивизияһының фронтҡа ебәрелеүенә 75 йыл тулыуға арналған.

✓Өфөлә "Көмөш Аҡбуҙат" IV Халыҡ-ара кино фестиваленә ғаризалар ҡабул ителә башланы. Фестивалдә ҡатнашыуға ғаризалар 2017 йылдың 1 сентябренә тиклем ҡабул ителә. "Көмөш Аҡбуҙат" фестивале Башҡортостандың баш ҡалаһында ағымдағы йылдың октябрендә үтә.

✓Башҡортостанстат Өфөләге нефть продукттарының айырым төрҙәренә уртаса хаҡтарҙы баҫтырып сығарҙы. Аҙналыҡ мониторинг мәғлүмәттәренә ярашлы, 27 мартҡа Өфөләге яғыулыҡ ҡойоу станцияларында дизель яғыулығының бер литры 38,28 һум тәшкил итә. А-76 (АИ-80) маркалы бензиндың хаҡы 33,90 һумға, АИ-92 - 35,68, АИ-95 38,82 һумға тиң.

✓ *Был насар ғәҙәткә ҡаршы көрәшеүҙең бер ысулы - ул законһыҙ рәүештә алкоголле эсемлек һатыусыларға һалынған штрафтың күләмен арттырыу. Штраф күләме 300 меңдән 500 мең һумға тиклем тәҡдим ителә.*



ДЕПУТАТ ҺҮҘЕ

# КӘРӘКЛЕ ЗАКОНДАР...

## ҡабул да ителһен, эшләһен дә

**РФ Дәүләт Думаһы Дәүләт төҙөлөшө һәм ҡануниәт буйынса комитеттың алкоголь продукцияһын законһыҙ һатҡан өсөн штрафтарҙы арттырыу тураһындағы закон проектын хупланы. Был турала закон проекты авторҙарының береһе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**



➔ **Эскелек - бөгөнгө көн афәттәренең иң ҡурҡыныслыһы. Был закон проекты проблеманы хәл итеүгә нисек ярҙам итәсәк?**

- Һайлау алдынан да, бөгөн дә халыҡ менән йыш осрашам. Үҙем дә ауыл ерендә тыуып-үҫкән кеше булараҡ, ауыл халҡының күп проблемаларын яҡшы аңлайым. Ысынлап та, шуларҙың береһе - эскелек. Был насар ғәҙәткә ҡаршы көрәшеүҙең бер ысулы - ул законһыҙ рәүештә алкоголле эсемлек һатыусыларға һалынған штрафтың күләмен арттырыу. Халыҡ үҙе һорай был турала, закондар йомшаҡ, тиҙәр. Әлеге көндә законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлек һатҡан өсөн штраф күләме - 2-2,5 мең һум. Быңдай эсемлек һатыуҙан килгән килемде яҡынса ғына иҫәпләп ҡараһаҡ, был араҡы һатыусыларға артыҡ зыян да килтермәйҙер инде. Сөнки был өлкәлә хоҡуҡ боҙоуҙар йылдан-йыл арта ғына бара. Ошоларҙы иҫәпкә алып, беҙ штрафтарҙы арттырырға тәҡдим иттек. Бәхәстәр күп булды, ҡаршылар ҙа бар ине. Шулай ҙа "Рәсәй Федерацияһының административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы Кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы федераль закон проекты әле беренсе уҡыуҙарҙы үтте һәм, минең фекеремсә, законды яҙғы сессияла ҡабул итербеҙ, тип уйлайым.

➔ **Штрафтарҙың күләме үҙгәреүе физик һәм шулай уҡ юридик шәхестәргә лә ҡағыласаҡмы?**

- Бөгөнгө штрафтар системаһы араҡы һатыусылар ошо юл менән алған килемгә бөтөнләй ҡулайлаштырылмаған, тигәйнем инде. Ул штрафты түләй ҙә, артабан да спиртлы эсемлек һатыуын дауам итә. Шуға ла беҙ "Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында"ғы РФ Кодексына өҫтәмә статья индерергә тәҡдим итәбеҙ, уның буйынса тап физик шәхестәргә законһыҙ алкоголь продукцияһы һатҡан өсөн административ яуаплылыҡ ҡаралған. Штраф күләме 300 меңдән 500 мең һумға тиклем тәҡдим ителә. Шулай уҡ сифатһыҙ, легаль булмаған алкоголь продукцияһы әйләнеше артыуын иҫәпкә алып, лицензияһыҙ эшмәкәрлек алып барған өсөн административ яуаплылыҡты көсәйтеү ҡаралған. Закон проекты физик шәхестәргә генә ҡағылмай, шәхси эшҡыуарҙарға һәм юридик шәхестәргә ҡарата яуаплылыҡ көсәйтеләсәк. Уларға һалынған штраф 1 млн һумға тиклем булырға тейеш. Әгәр ҙә сифатһыҙ спиртлы эсемлектән кемдеңдер һаулығына зыян килә икән, енәйәт эше ҡуҙғатыу ҙа ҡаралған.

Әле ҡала магазиндарында ҡулланылған Алкоголь продукцияһын иҫәпкә алыуҙың берҙәм дәүләт автоматик системаһы (ЕГАИС) быйылғы йылдың 1 июленән ауыл магазиндарына ла ҡуйылырға тейеш. Был электрон система эшләй башлағандан алып сифатһыҙ спиртлы эсемлек һатыу күпкә кәмегән. Шулай уҡ һатыусы өсөн яуаплылыҡ ҡаралған, юғиһә, етәксеһен йәшереп, уларҙың спиртлы эсемлек һатыуы ла ихтимал. Йәғни, һатыусы ла, етәксе лә законһыҙ спиртлы эсемлек әйләнеше өсөн яуап бирергә, һәр хәлдә, был аҙымды яһар алдынан ете ҡат уйларға тейеш. Әлбиттә, былар ғына кешене эсеүҙән тыя алмаясаҡ, шулай ҙа мәсьәләне хәл итеүҙә ниндәйҙер аҙым булыр ине.

➔ **Закон үҙ көсөнә инер ҙә, тик уның эшләп китеүе халыҡтан да тора түгелме һуң? Минең шул-шул күршем, ауылдашым законһыҙ рәүештә спиртлы эсемлек менән һатыу итә, тип ҡыҫҡырып әйтергә тартыныуҙары ла ихтимал бит?**

- Быңа был тартыныуҙы мин аңлап етмәйем. Ҡайҙа һатыуына ҡарамаҫтан - өйөндәме, шәхси магазинындамы - ул бит ағыу һата. Ул халҡыбыҙҙың әхлаҡи ҡанундарын һанға һуҡмай, кешеләрҙең яҙмыштары, сәләмәтлектәре менән "уйнай". Әҙерәк ояла белгән кеше был юлға бер ҡасан да баҫмаясаҡ. Әгәр ул оялмай икән, ни өсөн ауылдаштары тейешле органдарға хәбәр итеүҙән оялырға тейеш? Эскелек хәҙер шундай кимәлгә етте, уны тамырынан өҙөп ташлау өсөн бөтөн ысулдарҙы ла ҡулланырға бурыслыбыҙ. Ауылдың старостаһы, ағинәйҙәр, аҡһаҡалдар һәм, әлбиттә, ауыл хакимиәте башлығы бар. Улар спиртлы эсемлек һатыусыны саҡырып һөйләшә, әгәр ҙә эшмәкәрлегенде туҡтатмаһаң, ауылдан сығып кит, тип әйтә лә ала. Кеше үҙе йәшәгән еренә, ауылдаштарына, ерҙәштәренә ҡарата битараф булырға тейеш түгел. Юғиһә, депутаттар ниндәй генә закондар ҡабул итмәһен, халыҡ битараф ҡала икән, бер файҙаһы ла булмаясаҡ. РФ Дәүләт Думаһының етенсе саҡырылыш шуныһы менән айырылып тора: проект өсөнсө уҡыуға тәҡдим ителгәндә үк уның артабан эшләп китерен тәьмин итәсәк документтар әҙер буласаҡ.

➔ **Бөгөнгө көндә тағы ла ниндәй закон проекттары өҫтөндә эшләйһегеҙ?**

- Ауыл халҡына тағы ла бер файҙа килтерерлек закон тәҡдим иттек - ул да булһа, РФ Урман кодексының 32-се статьяһына үҙгәрештәр индереү. Бөгөнгө көндә ауылда йәшәүселәр урмандарҙан ҡороған ағасты ла йыйып ала алмай, быңың өсөн ул урман участкаһын арендалау договоры төҙөргә тейеш. Закон проекты хуплау тапһа, халыҡ ҡороған ағастарҙы бушлай ала алыр ине. Быңың бер кире яғын да күрмәйем, урман да таҙарып ҡалыр ине, ҡороған ағас янғындарҙы гөрләтеп ебәрергә сәбәп булыуҙан туҡтар ине. Һирәк кенә булһа ла урманға сығам, хәҙер юлдарға ла ҡороған ағастар ҡолап бөткән, янғын була ҡалған хәлдә, унда машина ла үтеп инә алмаясаҡ. Әлегә был тәҡдим тулыһынса өйрәнелмәгән, артабан ул тулыланасаҡ әле. Тик был закон кешегә кәрәк, шуға ла уны аҙағынаса еткерергә тырышасаҡбыҙ.

Шулай уҡ тағы ла бер кәрәкле закон проекты беренсе уҡыуҙы үтте. Ул да булһа, баҡсасылыҡ ширҡәттәренә ҡағыла. Бөгөнгө көндә уның 5 төрө иҫәпләнә, закон ике төрөнә ҡағыласаҡ - баҡсасылыҡ һәм йәшелсәселек. Закон буйынса, йәшелсәселек участкаһында йорт төҙөргә ярамай. Кешенең баҡсасылыҡ участкаһында өй төҙөргә, унда даими йәшәргә, теркәлергә хоҡуғы булһын. Сөнки күп йәштәрҙең фатир һатып алырға мөмкинлеге юҡ, ә баҡса участкаһы күпкә арзаныраҡ була бит.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛҒА ЭШКӘ БАР...

✓ Башҡортостанда "Ауыл табибы" программаһында ҡатнашыусыларҙың йәше арттырылды. 2017 йылда 50 йәшкәсә табиптарҙың программала ҡатнашыу һәм шуның өсөн "күтәрелеп китеүгә" миллион һум алыу мөмкинлегe барлыҡҡа килде. Был ауылдарға тәжрибәле белгестәрҙе йәлеп итергә мөмкинлек бирәсәк. Алдан программала 35 йәшкә тиклемгә медиктар ғына ҡатнаша алды. Тағы ла бер яңылыҡ - белгестәр эш урындарын тик ауылда ғына түгел, ә ҡала тибындағы ҡасабаларҙа ла һайлай ала. Юғары белем мотлаҡ шарт булып ҡала. Быйыл программаны тормошҡа ашырыуға федераль ҡаҙнанан - 72 миллион һум, республиканан 48 миллион бүленгән.

✓ Башҡортостан үлем осраҡтарын кәметеү буйынса лидер төбәктәр иҫәбендә билдәләнде. Ыңғай демографик күрһәткестәр Рәсәй Федерацияһының 67 төбәгендә теркәлгән. Был мәғлүмәттәр демографик хәл буйынса төбәктәр менән уҙғарылған селектор кәңәшмәһендә килтерелде. Уны Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе урынбаҫары Ольга Голодец уҙғарҙы. Тотош Рәсәй буйынса 2016 йылдың 12 айында үлем күрһәткесе 2015 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 1,5 процентҡа, йәғни 23,5 мең кешегә кәмегән. Үлем күрһәткесе бер мең кешегә 12,9 процент тәшкил иткән, 2015 йылда - 13,1 процент. Быңдай күрһәткес илдә 20 йылдан ашыу теркәлмәгән. Башҡортостанда быултыр үлем 3,8 процентҡа, йәғни 1824 кешегә аҙайған - абсолют һандарҙа республикала иң яҡшы күрһәткес.

✓ 2017 йылда Рәсәйҙең алты федераль округының 27 төбәгендә, шул иҫәптән Башҡортостанда урман ҡоротҡостарының ябырылыуы фаразлана. Ошо хаҡта, "Антистихия" үҙәге ҡуҙаллауҙарына һылтанып, "РИА Новости" хәбәр итә."Төньяҡ-көнбайыш (Вологда өлкәһе), Үҙәк (Брянск, Владимир, Воронеж, Мәскәү өлкәләре), Көньяҡ (Краснодар крайы, Адыгей, Волгоград, Ростов өлкәләре), Волга буйы (Башҡортостан, Татарстан, Сыуашстан, Ырымбур, Һамар, Ульяновск өлкәләре), Урал (Ҡурған, Төмән, Силәбе өлкәләре), Себер (Алтай, Красноярск крайҙары, Алтай, Тыва, Иркутск, Кемерово, Новосибирск, Омск, Томск өлкәләре) федераль округтары биләмәләрендә урман ҡоротҡостарының күп булыуы һәм зыян килтереүе көтөлә", - тиелә 2017 йылға ғәҙәттән тыш хәлдәр фаразында.

✓ Башҡортостанда ҡырҡылған урмандар тулыһынса тиерлек тергеҙелә. 2016 йылда тотош ҡырҡылған майҙандарҙа урманды тергеҙеү 98 процент тәшкил иткән (план буйынса 82 процент). Ошо хаҡта ведомствоның йомғаҡлау коллегияһында республиканың урман хужалығы министры Динир Әхмәтйәнов хәбәр итте. Ағас әҙерләү күләме 33 процент тәшкил иткән (план буйынса - 31). Билдәләнеүенсә, быултыр республиканың урман хужалығы менән идара итеү системаһы үҙгәртеп ҡоролған - урман контроленең район-ара территориаль бүлексәләре асылған. Яңынан булдырылған учреждениеларҙың бурысы - түләүҙәр буйынса үҙәкләштерелгән иҫәп алып барыу һәм федераль ҡаҙнаны тулыландырыу буйынса планды үтәү, урман фонды менән файҙаланған өсөн бурысты кәметеү һәм бурысты түләтеүҙе ойоштороу.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шифалы ванна

❖ Ҡарағайҙың энәләре, тубырсығынан төнәтмә яһап, ванна ингәндә һыуға өҫтәргә. Йөҡоһоҙлоҡтан файҙалы, тирене таҙарта, быуындар һыҙлауын баҫа. Ай дауамында аҙнаһына 2-3 тапҡыр ванна инергә.

### Йыйырсыҡтарҙан

❖ 1 ҡалаҡ ылыҫлы төнәтмәгә 1 йомортҡа һарыһы, 6 тамсы касторка майы өҫтәргә, бит тиреһенә һөртәргә, 5 минуттан йылы һыу менән йыуырға.

### Йәшлек эликсиры

❖ Быяла шешәне ҡабығынан таҙартылған һарымһаҡ менән тултырырға, шешә тулғансы медицина спирты ҡойорға. Бүлмә температураһында 2 аҙна ҡараңғы урында тоторға, һәҙәргә һәм төшкө аш алдынан 1-әр балғалаҡ эсергә. Ҡулланыу ваҡыты сикләнмәгән.

❖ 2 баш һарымһаҡты ҡабығынан таҙартырға, ваҡлап турарға, быяла банкала яңы ғына һығылған 6 лимон һуты менән болғатырға, банканың ауыҙын таҙа сепрәк менән бәйләргә. 1 аҙна йылы урында тоторға, көн һайын ағас ҡалаҡ менән болғатып торорға. 2 аҙна буйы ашағандан һуң 1 балғалаҡ эликсирҙы 1 стакан йылы һыуҙа болғатып эсергә. Эликсирҙы ярты йыл һайын әҙерләргә һәм ҡулланырға.

❖ Йоҡлар алдынан 1 стакан ҡайнап ултырған һыуға 1/4 лимон һуты өҫтәп, 1 минут ҡайнатырға, 1 балғалаҡ бөтнөк үләне, 1 балғалаҡ шәкәр өҫтәргә, уттан алырға һәм 5 минут төнәтеп, эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә. Ғәҙәттә, февралдән апрелгә һәм октябрҙән декабргә тиклем эсәләр. Ҡалған ваҡытта йыл дауамында һәр көн иртән 1 стакан минераль һыуға 1/4 лимон һуты, 1 ҡалаҡ йүкә йәки ҡарабойҙай балы өҫтәп, ас ҡарынға эсергә.

### Иммунитетты нығытыу

❖ Иммунитетты нығытыу өсөн тигеҙ күләмдә гөлйемеш, аҡ сәскә, кесерткән һәм ҡаҙ үләне алырға, көн һайын 1 ҡалаҡ ошо үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтеп, һөҙөп, иртән ас ҡарынға эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Әүлиәләрҙең рухы бер ваҡытта ла ер ҡыҙырып йөрөмәй, әүлиәлек үҙе үк Хаҡ Тәғәлә тарафынан айырым халыҡҡа уның тыуған ерен, рухын һаҡлап ҡалыр өсөн барлыҡҡа килтерелгән.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

Һамар-ырғыҙ комплексында табын, юрматы, ҡыпсаҡ, бөрйән ырыуҙары инә. Хәҙерге административ бүленеш буйынса унда Һамар өлкәһенең көньяҡ-көнсығыш, Ырымбур өлкәһенең көньяҡ-көнбайыш һәм Һарытау өлкәһенең көнсығыш өлөшө инә. Сағыштырмаса, был төбәккә хас материалдар аҙыраҡ.

Билдәле булыуынса, был комплексҡа ҡараған башҡорт кейеме нигеҙе малсылыҡ мәҙәниәтенә ҡайтып ҡала. Бында, көньяҡ-көнсығыштағы кеүек, өҫ кейеменә өҫтөнлөк бирелгән. Шулай ҙа был комплекста һауа температураһы күпкә йылыраҡ. Халыҡтың төп шөғөлө булып ер эшкәртеү һәм тигеҙлектә мал көтөү иҫәпләнә.

Был төбәктә тундар, буҫтау еләндәр, толоптар күберәк осрай. Шулай ҙа костюмдың айырып тороусы өлөшө булып кәзәкей тора, ул хәрби сюртукка оҡшаған **(һүрәт)**. С.Н. Шитова фекеренсә, был сиккә яҡын урынлашыу һәм казак хеҙмәтенә мөнәсәбәтле булыу менән аңлатыла. Бынан тыш, кәзәкей бик уңайлы кейем. Башҡорт кәзәкейе тубыҡҡа



тиклем төшөп торған, йәки унан саҡ ҡына өҫтәрәк булған. Кеҫәләре бар, улар оҙонса түңәрәк итеп беселә. Кәзәкейҙән тыш, был төбәктә елән кейгәндәр.

Өҫкө кейем биҙәлмәгән тиерлек, ҡайһы берҙә уҡа тегелгән һәм итәк сите сигелгән. Бында тәбиғәт тә башҡасараҡ. Ҡылғанлы далалар күберәк, урман һирәк осрай, бары тик имән урманы ғына уртау-утрау булып ултыра. Был үҙенсәлек кейемде биҙәүҙә лә сағылыш тапҡан. Тәбиғәт зонаһында урман һәм йәшеллек юҡ, күлдәктәр бында йәшел, ҡыҙыл, һары төҫтә. Көньяҡ-көнсығыш костюмындағы кеүек, бында ла ҡыҙыл мәрйен, аҡ төҫтәге тәңкәләр һәм ҡара төҫтәге өҫ кейеме йышыраҡ осрай.



Тик һамар-ырғыҙ башҡорттары костюмында был төҫтәр костюм буйлап ташланмаған, ә йыйнағыраҡ, бер урындараҡ ҡуллланыла.



Баш кейемдәрен бында яулыҡ менән кейгәндәр. Яулыҡ, шәл менән бер рәттән, тире башлыҡтар киң таралған. Күлдәктәр оҙон түгел, шул яғы менән улар дим буйы башҡорттары кейеменә оҡшаш **(һүрәт)**.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Аҙағы).**

*КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ*

# "ЙӘШЕРЕН ХАЗИНА"НЫҢ ЕРҘӘГЕ БИҘӘГЕ...

## Зәйнулла Рәсүлев тураһында бер кәлимә

**Башҡортостан Республикаһының 100 йыллыҡ юбилейын байрам итергә әҙерлек старт алған ағымдағы йылдың башҡорт халҡының рухи батшаһы, мәшһүр дин белгесе, философ, мәғрифәтсе-мөғәллим шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлевтың баҡыйлыҡҡа күсеүенә 100 йыл тулыуын билдәләү менән башланып китеүе, йәғни быуатлыҡ ваҡиғаларҙың тап килеүе осраҡлы ғына күренеш түгел. Башҡортостан Диниә назараты ойошторолоуға ла быйыл 100 йыл тула...**



### Бәрәкәте Башҡортостанда ҡалды

Шулай уҡ шәйехтең тыуыуына 175 йыл тулғанда Өфөнөң бер урамына уның исеме бирелеүе, ишан тыуып үҫкән Учалы районының Шәрип ауылында һәйкәл, Учалы ҡалаһында уның исемендәге мәсет асылыуы, Троицк ҡалаһындағы уның исемендәге мәсеткә ремонт үткәрелеүе, изге һөйәктәре ятҡан ҡәберенең һәм зыяраттың рәткә килтерелеүе, 2016 йылда Дағстандың баш ҡалаһы Махачкалала Зәйнулла Рәсүлев исемендәге яңы мәсет төҙөлөүе, 2012 йылдан башлап Троицк ҡалаһында "Рәсүлев уҡыуҙары" үткәрелә башлауы - былар барыһы ла ишан бәрәкәтенең ул тыуып үҫкән Башҡортостанда, уның изге һөйәктәре ятҡан ерҙәрҙә тороп ҡалыуы хаҡында һөйләй. Уның бәрәкәте ҡайҙалыр, икенсе урынға күсте, тиеүселәргә шуны ғына әйтергә ҡала: әүлиәләрҙең рухы бер ваҡытта ла ер ҡыҙырып йөрөмәй, әүлиәлек үҙе үк Хаҡ Тәғәлә тарафынан айырым халыҡҡа уның тыуған ерен, рухын һаҡлап ҡалыр өсөн барлыҡҡа килтерелгән. Тимәк, халыҡ төрлө сәбәптәр арҡаһында быуаттар буйы йәшәгән ерҙәрен ташлап киткән осраҡта ла, уның өсөн ебәрелгән әүлиәләр рухы мәңгелеккә шул урында ҡала, тыуған еренә, рухиәтенә тоғролоҡ һаҡлай, киткәндәрҙе тыуған еренә кире ҡайтырға әйҙәй.

1917 йылдың 2 февралендә Зәйнулла Рәсүлев вафат булғандан һуң атаҡлы рус академигы В.В. Бартольд "үҙ халҡының рухи короле вафат булды" (Петроград, 1917) тип яҙып сыға. Суфыйсылыҡтың Нәҡшбәндиә тәриҡәтен алға һөрөүсе башҡа милләттән булған шәйехтәр әле булһа Зәйнулла ишан хөрмәтенә үҙҙәренең улдарына һәм ейәндәренә Зәйнулла исемен бирә (уларҙың аталары, ҡартаталары "Рәсүлиә" мәҙрәсәһендә белем алған), уны кешелектең "Ҡотоб заман"ы йәғни "Ҡотлозаман"ы тип атай. Америка Ҡушма Штаттарының Калифорния университеты профессоры Хәмит Алғар Зәйнулла Рәсүлевты "Волга-Урал төбәгендәге Нәҡшбәндиә суфыйҙар йәмғиәтенең һуңғы Бөйөк Шәйехе" тип атаған. Ислам дине тарихын өйрәнеүсе француз ғалимы А. Беннигсен Парижда 1968 йылда сыҡҡан хеҙмәтендә: "Үҙ ваҡытында барса мосолман донъяһының академик уҡыу йорттары араһында "Рәсүлиә" мәҙрәсәһе белем биреү сифаты буйынса иң яҡшыһы булған", - тип яҙған.



*Тыуған ауылы Шәриптә (Учалы районы) Зәйнулла ишанға арналған обелиск.*

### Тамсыла ҡояш сағыла

Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең киң билдәле "Хәтирәләр"енең "Атайымдың Троицкиға сәйәхәте" бүлегендә "Рәсүлиә" мәҙрәсәһе урынлашҡан Троицк ҡалаһына барыуҙары, атаҡлы шәйех менән танышыуҙары, аралашып йәшәүҙәре хаҡында бәйән итә. Шул уҡ яҙмала киләсәктә башҡорт милли азатлыҡ хәрәкәте юлбашсыһы, бар донъяға танылыу яулаған мәшһүр булып киткән Әхмәтзәки Вәлиди Зәйнулла ишан Рәсүлевтың үҙ шәхесе формалашыуында уйнаған роле хаҡында ла әйтеп үтә. "Хәтирәләр"ҙең шул өлөшөн тулыһынса килтереп үтәм:

"Эш бөтөү менән атайым дуҫтарына һәм шәйехтәренә сәйәхәткә китә. Сәйәхәт Троицк ҡалаһындағы рухи етәксеһе Зәйнулла шәйехте барып күреү менән тамамлана. Юлда Ҡарағай Ҡыпсаҡ, Бөрйән ырыуҙарына ҡараған дуҫтарыбыҙҙың һәм шәйехтәрҙең йәйләүҙәрендә мәжлестәр ойошторолор ине. Унда ғилми, дини, хатта ҡайһы бер сәйәси мәсьәләләр хаҡында һөйләшә торғайнылар. Кире ҡайтҡанда атайым, үҙенең дастан ҡаһарманы Сура батырҙың ейәндәре тип иҫәпләгән Мәһәҙи һәм Әмин ауылы мосолман казактары, Түңгәүер, Туңғатар, Тамъян һәм Ҡатай ҡәбиләләре юлы менән килеп, ундағы дуҫтары менән күрешер ине.

Был сәйәхәт ай ярымға һуҙыла. Һәр йыл ҡабатланған сәйәхәттең өсөһөндә мин дә ҡатнаштым. Минең бурыс - ат менән арба бағыу. Һәр сәйәхәт фекер хаятыма йоғонто яһаны. 1904 йылдағы сәйәхәтебеҙ рус-япон һуғышына, 1905 йылдағыһы рус инҡилабы көндәренә, 1906 йылдағыһы рус Думаһы тирәһендәге көрәш заманына тура килде.

Мин дини мистиканы яратмайым. Ике йөҙлө тип хис иткән шәйехтәргә нәфрәт хисе тоя инем. Шуның менән бергә Муллаҡайҙан Ғабдулла хәҙрәт, Ҡолбахтынан Ғәбделханнан хәҙрәт һәм Троицкиҙан атайымдың рухи етәксеһе Зәйнулла хәҙрәт кеүек эскерһеҙ инсандарҙы, әхлаҡ һәм кешелеклелек өлгөһө булғандарын хөрмәт иттем. Был өс шәйехтән бәғзе яҡшы эштәргә лә өйрәндем. Өсөнсө тапҡыр, 1906 йылда, барғаныбыҙҙа Зәйнулла ишан миңә ныҡ илтифат күрһәтте. Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, миңә төрлө һорауҙар биреп, яуабымды диҡҡәт менән тыңланы йәки йүнәлеш биреүсе һүҙҙәр һөй-



*Учалы ҡалаһындағы "Зәйнулла ишан" мәсете.*

***✓ Әгәр ҙә үҙенең тормошонда Зәйнулла ишан Рәсүлевһыҙ өлгәшкән юғарылығын тик "приказчик" кимәлендә генә билдәләгән икән, беҙ хаҡлы рәүештә уны Рәсәй федерализмы "картатаһы" тип нарыҡлай алабыҙ.***

ләне, һәр хәлдә, төрлөсә һынап ҡараны. Бер көн иртәнге сәй мәжлесендә тағы бер нисә һорау бирҙе, белгән ҡәҙәр яуап ҡайтарҙым. Һуңынан барлыҡ кеше алдында: "Ал, улым, бәлки, берәй нәмә һатып алырһың", - тип ҡулыма ун тинлек алтын аҡса тотторҙо. Мин был аҡсаға, "Хеҙмәт" исемле китап лавкаһына инеп, Ғазалиҙың теологияны тәнҡит иткән бер әҫәрен, Мысырҙа һәм Истанбулда баҫылған һәм Ислам ижтимағиәтенә һәм фәлсәфәһенә бағышланған нәшриәтте, астрономия һәм физика фәне буйынса китаптар, Толстойҙың "Крейцерова соната" китабының һәм ҡайһы бер башҡа рус романдарының ғәрәпсә тәржемәләрен, французса өйрәнеү өсөн төрөксә яҙылған "Французса һөйләшеү китабы"н һәм бер рус китап лавкаһынан Толстойҙың мәмләкәтебеҙҙә минең тыуыуымдан һуң, 1891 йылда, булған ҙур аслыҡ хаҡында һөйләгән "Аслыҡ йылдары" исемле әҫәрен һатып алдым.

Бер нисә көндән шәйех минән, аҡсаңды нимәгә тотондоң, тип һораны. Мин алған китаптарымды һанап сыҡтым. Маҡтаны, русса беләһең, французса ла өйрәнә алһаң, бик яҡшы булыр, тине. Физика һәм астрономия китаптарын алыуымды ла хупланы. Айырыуса Толстойҙың аслыҡ йылдарына бағышланған хәтирәләре тураһында, яҡшы китап алғанһың, тине.

Шәйех был ун тинде миңе һынау өсөн биргән булһа кәрәк. Һуңыраҡ мәжлестәрҙә әлеге китаптарҙың ҡайһыларын уҡыуымды һәм уларҙа ниҙәр яҙылыуын да һораны. Ғазалиҙың "Әл-мунҡиаһ ән әл-далал" йәғни "Яңылыш юлдарға баҫыуҙан ҡотҡарыусы" исемендәге әҫәрен алыуымды һөйләгәс, шәйех, быны хәҙергә аңлай алмаҫһың, тине. Мин дә: "Бының ише китаптарҙы, ғәрәп теленән белемем тәрәнәйгәс уҡырмын, тип алдым", - тигәс, арҡамдан һөйөп, тағы ла аҡса бирҙе. Ун биш йәштә булыуыма ҡарамаҫтан, китапты дөрөҫ һайлауымды шәйех башҡа мәжлестәрҙә лә маҡтап һөйләне, быны ишеткәс, әлбиттә, минең күкрәк ҡабарҙы.

Мөхитебеҙҙә бик ныҡ хөрмәт ителгән был заттың маҡтау һүҙҙәре дәртләндереүсе бер көс булды. Шуның кеүек дәртләндереүсе хәл-ваҡиғалар булмаһа, бәлки, тормошом ғилемдән башҡа бер юлдарға йүнәлеш алыр ине. Мәҫәлән, Ҡаҙан шағиры Туҡай ҙа, шундай хәлдәргә ишара яһап: "Был фәҡирҙең башына ниҙәр килмәне, тик милләтем башымдан һыйпап, миндә үҫергә теләк тыуҙырҙы", - тигән. Әгәр шәйехтең дәртләндереүе булмаһа, мин, ихтимал, күптәр кеүек, ун биш йәшемдән сауҙа эшендә приказчик булып китер инем..."

Тамсыла ҡояш сағыла. "Хәтирәләр"ҙең ошо ҡыҫҡа ғына өлөшөндә лә Вәлиди Зәйнулла ишан Рәсүлев шәхесен бөтөн олулығында һынландыра алған. Әгәр ҙә Зәйнулла ишан һәм уның йоғонтоһо булмаһа, Вәлиди һынлы Вәлиди үҙен ни бары "приказчик" сифатында ғына күргән, йәғни беҙ икенселәй булған осраҡта Башҡортостан Республикаһын барлыҡҡа килтергән, улай ғына ла түгел, Рәсәй Федерацияһының нигеҙ таштарын һалған башҡорт милли хәрәкәте юлбашсыһы, бар донъяла танылыу яулаған мәшһүр ғалим Әхмәтзәки Вәлидиҙе белмәгән дә булыр инек.

Ҡартатайҙар, олатайҙар, атайҙар, бабайҙар, ҡартәсәйҙәр, өләсәйҙәр, инәйҙәр һәм әсәйҙәр беҙгә лә бәләкәй сағыбыҙҙа һис бер сәбәпһеҙгә аҡса бирә торғайны. Беҙ иһә, аҡсабыҙҙы усыбыҙға ҡыҫып, атҡа менгәндәй ҡыуанып, магазинға печенье йә хәлүә алырға йүгерә инек. Ә теге саҡта лавканан тәмлекәстәр һатып алырға үҫмер Зәкиҙең дә күҙе ҡыҙмаған тиһегеҙме?

Зәки Вәлиди Зәйнулла ишан Рәсүлевтың аҡса, берҙәй үк зауыҡ менән һынауын яҡшы үтә. Үҫмер Зәки төрлө йөкмәткеләге китаптар һатып алғандан һуң уларҙа ниҙәр яҙылыуы буйынса шәйехтең шәкертенән белемен тикшергән хәлфә кеүек һорашыуы ла күпкә ишара: шәйех үҙ заманы менән ҡатар атлаған, донъя әҙәбиәтен генә түгел, төрлө фәндәрҙе, тарихты яҡшы белгән һәм барыһына ярашлы фекер йөрөтөүгә һәләтле инсан булған, һәр төрлө яңылыҡҡа хәбәрҙар булған, үҙенең эшмәкәрлегенә ярашлы дини ғилем менән генә сикләнмәгән. Әхмәтзәки Вәлидиҙең артабанғы тормош юлынан белеүебеҙсә, ул да Зәйнулла ишан кеүек киң эрудициялы, донъяның күп кенә ғилемдәрен яҡшы белеүсе шәхескә әүерелә.

## Рәсәй федерализмы "картатаһы"

"Профиль" журналында (1998, 9 март, 58-61-се биттәр) сыҡҡан "Зәки Вәлидов. Дала бүреһе, рус федерализмы атаһы" тигән мәҡәләһендә Юрий Борисенок менән Александр Шишков Әхмәтзәки Вәлидиҙе "рус федерализмы атаһы", тип атай. Ысынлап та, башҡорт милли хәрәкәте юлбашсыһы Әхмәтзәки Вәлиди башҡорт ғәскәрен төҙөп, үҙ халҡына милли автономия төҙөүгә өлгәшә. Әлбиттә, был осраҡта ул күп һанлы арҡадаштарына таяна. Шулай ҙа, тарих "теләк-шарт һөйкәлеше" шарттарына нигеҙләнмәгән осраҡта ла был шәхестең Башҡорт Автономиялы Республикаһын төҙөүҙәге хәл иткес ролен бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Шуға күрә лә, әгәр ҙә донъяла ошо шәхес булмаһа, Рәсәйҙең аҙ һанлы халыҡтарының артабанғы яҙмышы бөтөнләй башҡаса булырын да күҙаллау мөмкин булыр ине. Башҡорттар үҙ автономияһын ҡулына ҡорал алып, үҙ ғәскәрен төҙөп яулай, башҡа халыҡтарға автономия хоҡуғы федерация төҙөү зарурлығы булған өсөн генә бирелә. Ю. Борисенок менән А.Шишков тап шуның өсөн дә Әхмәтзәки Вәлидиҙе "рус федерализмы атаһы" тип атай ҙа инде.

Шундайын әһәмиәткә эйә шәхес, әгәр ҙә үҙенең тормошонда Зәйнулла ишан Рәсүлевһыҙ өлгәшкән юғарылығын тик "приказчик" кимәлендә генә билдәләгән икән, беҙ хаҡлы рәүештә Зәйнулла ишан Рәсүлевты Рәсәй федерализмы "картатаһы" тип нарыҡлай алабыҙ.

Әхмәтзәки Вәлидиҙең Зәйнулла ишан Рәсүлев шәхесенә бәйле азатлыҡ өсөн көрәш рухы формалашыуы хаҡында философия фәндәре докторы Илшат Насиров үҙенең "Суфыйсылыҡ тураһында" тигән ғилми хеҙмәтендә яҙып үтә: "Зәки Вәлидиҙең сәйәси ҡараштарын булдырыуҙа һәм үҫтереүҙә Рәсәй мосолмандары тормошо тураһындағы "Тәлфиҡ әл-әхбәр" тип аталған тарихи китап авторы, башҡорт тарихсыһы суфый шәйех Морат Рәмзиҙең йоғонтоһо ғәләмәт көслө була (Әйткәндәй, был китап Зәйнулла ишан Рәсүлевтың финанс ярҙамы менән донъя күрә - **Ә.Ғ.-Ү.**). Башҡорттарҙың сәйәси азатлығы өсөн көрәштең мотлаҡ кәрәклеге тураһында фекер суфый шәйех Морат Рәмзи уларға ҡунаҡҡа килгән саҡта әңгәмәләшкәнендә йәш Зәкиҙең аңына һеңешә. Батша хакимлығынан рухи яҡтан азат булған тап башҡорт суфый шәйехтәре Рәсәй империяһы шарттарында ябай башҡорттарҙы рухи азатлыҡ өсөн көрәшкә ойошторған. Һөҙөмтәлә ҡыҫҡа ғына ваҡытта Башҡортостан Республикаһын һәм Башҡорт Армияһын төҙөрлөк милли фекер йөрөткән ҡөҙрәтле башҡорт инсандары барлыҡҡа килгән..." ("Башҡортостан - әүлиәләр иле". "Китап". 2012 йыл, 49-сы бит)

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Филология фәндәре кандидаты Фәйрүзә Ғарипова Учалы ҡалаһында Зәйнулла Рәсүлев исемендәге мәсеттә үткән ғилми-ғәмәли конференциялағы сығышында бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. хәҙисен килтерҙе. Унда Бәйғәмбәребеҙ "Әҙ-Ҙәриәт" сүрәһенең 52-56-сы аяттарын шул рәүешле тәфсирләй: "Мин йәшерен Хазина инем, Мине белеүҙәрен теләп, ошо халыҡты барлыҡҡа килтерҙем…" Артабан Фәйрүзә үҙенең сығышын шулай дауам итә: "…Аллаға шөкөр, Аллаһы Тәғәлә, беҙҙең халыҡҡа булған һөйөүен белдереп, беҙҙе лә камил заттар араһында күрергә теләп, беҙгә күпләп үҙенең дуҫтарын, әүлиәләрҙе ебәргән. Шулар араһында кешелектең "Ҡотоб заман"ы, Урал-Волга төбәгендәге Нәҡшбәндиә суфыйҙар йәмғиәтенең һуңғы бөйөк шәйехе Зәйнулла Рәсүлев хәҡиҡәт юлында мәңгелек бәхеткә әйҙәүсе һүнмәҫ йондоҙ, аҙаштырмаҫ маяк, өлгөлө әҙәп-әхлаҡ эйәһе булып тора…"**

**Эйе, "Йәшерен Хазина"ның ерҙәге биҙәге милләттәшебеҙ Зәйнулла ишан (ғәрәпсәнән был исем "Аллаһ биҙәге" тигәнде аңлата) халҡыбыҙҙың өлгөлө әҙәп-әхлаҡ, иман, намыҫ, выждан өлгөһө лә булып тора. Хаҡ Тәғәлә ҡаршыһында халҡыбыҙҙы ла биҙәп тора ул. Халҡыбыҙҙың үҙ асылына ҡайтыу юлы - Зәйнулла ишан Рәсүлев күрһәткән юл! Иншалла!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 12-се һанда).**



*Троицк ҡалаһы зыяратында Зәйнулла ишан ҡәбере.*

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## ХАНЛЫҠТАР

### IV бүлек

Көнбайыш Төрөк ҡағанаты осоронда төрөктәр төньяҡта Бөрйән бейлеге ойоштороурға рөхсәт бирә. Унда 605 йылдан алып Бөрйән Сылбырҙың улы Төпшәк хакимлыҡ итә. Төпшәк 15 йылдан һуң вафат була, тәхетен өлкән улы Буйъюрғанға ҡалдыра. VII быуаттың уртаһына көнбайыш Төрөк ҡағанаты йәшәүҙән туҡтай һәм уның Европа өлөшөндә Дуло династияһы етәкләгән Болғар дәүләте, Ашин төркөттәре династияһы етәкләгән Хазар дәүләте барлыҡҡа килә. Ошо саҡта башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларын тәшкил итеүсе ҡәбиләләр төркиҙәр һәм болғарҙар килгәнсе үк көнсығыш Европа һәм урта Волга буйын биләй. Болғарҙар һан яғынан һәм хәрби көс яғынан хазарҙарға ҡарағанда күпкә юғары була. Урта Волга буйына килгән Хазар болғарҙары урындағы көнбайыш башҡорттар менән яйлап ҡушыла. Хазар Болғарияһы составына ингән болғар ҡәбиләләре артабан бер дәүләттең халҡы булып китә. Бында "болғар" атамаһы йыйылма этноним ролен үтәй.

Болғарҙарға башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары булған хонтурсылар, унығырҙар, утриғооҙар, ҡотриғурҙар, биләрҙәр, бөрйәндәр, шулай уҡ сыуаштар, фин-уғыр вәкилдәре һ.б. ҡараған. Башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларына ҡараған хонтурсылар, биләрҙәр, бөрйәндәр вәкиле Болғарҙың хакимы булып китеүендә Салауат Хәмиҙуллиндың фекере менән тулыһынса килешергә була, ханлыҡҡа ҡараған башҡа ҡәбиләләр араһында улар кеүек ҡеүәткә эйә берәмектәр булмай. Шуға күрә лә "болғар" атамаһы тиҙҙән телдән төшөп ҡала башлай. VII быуаттан үҙаллы боронғо башҡорт дәүләттәре конфедерацияға берләшеп, Тамта дәүләтен барлыҡҡа килтерә. Ә инде XI-XII быуаттарҙа легендар юлбашсы Башҡорт хан тарих аренаһына сыҡҡас, күп кенә ырыу-ҡәбиләләр уның ҡанаты аҫтында Евразияның төньяғында бөйөк державаны барлыҡҡа килтерә. Боронғо башҡорттарҙың ата-бабаларын тәшкил итеүсе уғырҙар "башҡорт" атамаһын ала. Бөйөк Башҡорт иленә Урта Волга-Урал- Евразияның Көнбайыш Себер өлөшөндә йәшәүсе табын, барын, бөрйән, ғәйнә, иштәк, бәшәнәк һәм башҡа ҡәбиләләр инә. Мәшһүр әрмән тарихсыһы Гевонд (VIII б.) яҙыуынса, был дәүләттең төп халҡын башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларынан хонтурсылар, бүләрҙәр, ҡоман-ҡыпсаҡтар, бөрйәндәр тәшкил иткән.



**(Дауамы бар).**

*✓ Йәш, өмөтлө егеттәр барлыҡҡа бар ул. Тик уларға матди ярҙам да кәрәк. Әйтәйек, йәштәр үҙҙәренең көндәлек мәшәҡәттәренән арынып, махсус рәүештә спорт менән генә шөғөлләнһә, тау аҡтарырҙар ине.*



# СПОРТТА СИТ ҠАРШЫЛЫҠТАР

## һин ни бары үҙеңде генә еңергә бурыслыһың

**ИЛФАТ ӘМИРОВ:**

*Күңелдә ҡуҙғытып-ҡуҙғытып торған тағы бер проблема - ул ир-егеттәребеҙҙе ысын ир-егеттәр спорты менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеү. Мине тағы сәләмәт тормош темаһы ла борсой. Йәштәштәр алкоголь, тәмәке, наркотик ҡулланыу һымаҡ алама ғәҙәттәрҙе үҙһенмәһен ине, тип теләйем.*

**Уҡыусыларыбыҙ Илфат Әмировты былтыр гәзитебеҙҙең 25-се һанында баҫылған мәҡәлә аша ла беләләр. Һәр хәлдә, Көйөргәҙе районы Илкәнәй ауылы егетенең көрәш майҙандары уртаһына башҡорт еләнен һәм ҡамсат бүркен кейеп сығыуы, рингтарҙа үҙен "Башҡорт" тип таныштырыуҙы талап итеүе хәтерегеҙҙә ҡалғандыр. Юрист һөнәрле, Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында аспирантурала уҡыусы, Мәскәүҙә шөғөлләнеүсе спортсы-профессионал - ҡатнаш алыш төрҙәре (ММА) буйынса Халыҡ-ара, Бөтә Рәсәй турнирҙары еңеүсеһе Илфат ӘМИРОВ күптән түгел Ҡытайҙың Чиньжоу ҡалаһында үткән WLF турнирында еңеүсе булып танылғайны. Ошо уңайҙан Өфөгә ҡайтҡанында беҙ тағы ла уның менән әңгәмәләшеп алырға булдыҡ һәм уны редакцияға саҡырҙыҡ. Әйткәндәй, Өфөлә лә күнекмәләр үткәреүгә, ваҡыты бик тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, Илфат беҙҙең редакцияла булырға, журналистар менән аралашырға бик ярата.**

**Илфат, һеҙ күптән түгел Ҡытайҙа ярыштарҙа ҡатнаштығыҙ. Был илгә барыуығыҙ, унда нисек сығыш яһауығыҙ тураһында һөйләп үтһәгеҙсе...**

- Турнир Чиньжоу ҡалаһында үтте. Беҙ, минең тренерым һәм секундантым, Ҡытайға саҡырыу буйынса барҙыҡ. Юл сығымдарыбыҙҙы ойоштороусылар үҙҙәре ҡапланы. Һөнәри рингта үҙ ауырлыҡ категориямда (70 кг) Рәсәй исеменән сығыш яһаным. Ҡытай көрәшселәре донъяның төрлө тарафтарынан килгән батырҙар менән алышты. Һәр ҡытай батырына - бер ҡунаҡ батыр тура килде. Мин быға тиклем һөнәри рингта бер тапҡыр ҙа еңелеү кисермәй, гел еңеп килгән Ҡытай спортсыһы менән көс һынашып, еңеүгә өлгәштем. Еңеү ҡыуанысы шул тиклем көслө булғандыр - ул төндә керпек тә ҡаҡманым тиерлек: ҡунаҡхана бүлмәһен буйға аҙымлап үлсәй-үлсәй, таң аттырҙым.

Ҡытайҙар киләһе ярыштарға тағы саҡырһа, ҡыуанып ҡатнашасаҡмын, тип йөрөйөм. Ни өсөн тигәндә, Ҡытай көрәшселәренең даны күптән, күптәргә билдәле. Ҡытай халыҡ республикаһында комплекслы яңғыҙ алыштар дәүләт тарафынан финанслана. Ҡытай дәүләт корпорациялары футболды һәм ҡатнаш алыш төрҙәрен үҫтерергә мул аҡса бүлә. Шуға ла, ярыштары юғары кимәлдә ойошторола, спортсылары юғары уңыштары менән көйөрмәндәрен һөйөндөрә. Ҡытайҙарҙың тағы бер шәп яғы бар - улар донъялағы иң көслө белгестәрҙе үҙҙәренә ылыҡтырыу юлын эҙләй. Әлеге турнир - шуға дәлил.

**Билдәле булыуынса, һеҙ Башҡортостанда Грепплинг федерацияһы булдырғанһығыҙ. Бынан тыш, һеҙ Өфөләге "Тархан" клубында бушлай оҫталыҡ дәрестәре лә уҙғараһығыҙ, тип беләбеҙ. Әле ниндәй ғәмдәр, ниндәй сәмдәр менән Өфөгә килдегеҙ? Моғайын, тағы берәй ҙур эш атҡарырға уйлайһығыҙҙыр...**

- Бер йыл самаһы элек Динар Аҡмырҙин менән Башҡортостанда грепплингтың ADCC төрө федерацияһы булдырҙыҡ. Бының өсөн Мәскәүҙәге федерациянан ризалыҡ алдыҡ. Әлеге көндә шул спорт төрөн үҫтереү хыялы менән янған көнөбөҙ. Беҙҙең бик шәп йәштәребеҙ бар. Улар көслө лә, рухлы ла, тырыш та. Ошо йәштәрҙә үҙем белгән һөнәрҙәргә өйрәтеп, уларҙан үҙем белмәгәнде өйрәнеп, Башҡортостаныма файҙа килтереү - тағы бер маҡсатым. Республикала ММА менән грепплинг спорттары, башҡа төбәктәр менән сағыштырғанда, әллә ни үҫешеп китә алмай. Минеңсә, кәрәкле иғтибар булһа, был "ташты" ла урынынан ҡуҙғатып буласаҡ. Ул сағында ил кимәлендә генә түгел, донъя кимәлендә лә тотҡан урыныбыҙ ныҡлы буласаҡ.

Күңелдә ҡуҙғытып-ҡуҙғытып торған тағы бер проблема - ул ир-егеттәребеҙҙе ысын ир-егеттәр спорты менән шөғөлләнеүгә йәлеп итеү. Мине тағы сәләмәт тормош темаһы ла борсой. Йәштәштәр алкоголь, тәмәке, наркотик ҡулланыу һымаҡ алама ғәҙәттәрҙе үҙһенмәһен ине, тип теләйем. Был теләгем эшмәкәрлегемдә лә сағылыш табалыр. Балалар, үсмерҙәр, йәштәштәр өсөн спортта юғары уңышҡа өлгәшкән Венер Ғәлиев, Денис Шафиҡов һымаҡ уҡ өлгө булғым килә.

**Балалар, үсмерҙәр тураһында һүҙ сыҡҡас, әйҙәгеҙ әле, һеҙҙең үҙегеҙҙең балалыҡ йылдары тураһында иҫләп алайыҡ. Һеҙҙе спортҡа илткән тәүге һуҡмаҡтар ҡайһы тарафтарҙан баш ала икән? Тағы, бөгөн барған оло юлығыҙ ҡай тарафҡа тоҫмалланыуы ла ҡыҙыҡлы беҙгә.**

- Бала сағым тиҫтерҙәремдең, замандаштарымдың балалыҡ осоронан бер яғы менән дә айырылманы. Шул уҡ ауыл малайымын, йәйҙәрен йылға буйынан ҡайтышмаһыҡ, "Минск" мотоциклында елдерҙек, ҡайһы саҡта малайҙар менән "әләгешеп" киткән саҡтар ҙа булғыланы. Бала сағым Илкәнәйҙә үтте, унан Күмертау ҡалаһындағы 3-сө башҡорт гимназия-интернатында, 8-се синыфтан 11-сегә тиклем Ишембайҙағы кадет корпусында уҡыным. Мәктәптән һуң Мәскәүҙә Юриспруденция институтында студент һурпаһы "һемерҙем".

Бала саҡтан спорт менән шөғөлләндем: гимназияла ике йыл дзюдо өйрәндем, ҡала беренселегендә призер булдым. Кадет корпусында физкультура урынына ҡул һуғышы секцияһына йөрөү мөмкинлеген файҙаландым. Мәскәүгә күскәс, ҡатнаш алыш төрҙәре (ММА) менән ҡыҙыҡһынып киттем. Өс айҙан ҡатнаш алыштың Тсу Шин Ген төрө буйынса Рәсәй чемпионы титулын яуланым. Унан күп тә тормай, панкратион буйынса Рәсәй чемпионатында призерҙар исемлегенә индем. Шулай йәйләп-йәйләп шөғөлләнеп, 2011 йылда тәүге һөнәри алышта ҡатнашыу сирҡанысы алдым. Шул көндән алып һөнәри рингтарҙа сығыш яһайым. Ваҡыты-ваҡыты менән һәүәҫкәрҙәр өсөн ойоштролған турнир-чемпионаттарҙа ла ҡатнашам. Былтыр тулы бәйләнешле каратэ буйынса Рәсәй чемпионатында беренселек яуланым.

Ҡытайҙан башҡа сит илдә сығыш яһағаным юҡ ине. Киләсәктә Ҡытайға барып, ошо ойошманың чемпионы исемен яуларға теләйем. Аҙаҡ, берәй мәл, бөтөн уңышлы ҡатнаш алыш төрҙәре көрәшселәре һымаҡ, ММА "мәккәһе"нә - Америкаға барып етермен, шунда шөғөлләнермен, тигән хыялым бар. АҠШ-та донъяның иң яҡшы оҫталары көрәшә. Шуға ла барыһы ла Америкаға ынтыла, сөнки унда ММА спортының иң шәп спотсылары йәшәй. Иң яҡшы промоутерҙар ҙа, иң яҡшы көрәшселәр ҙә АҠШ-та. Бөгөн АҠШ спортсылары менән көс һынашып ҡарамай тороп, үҙеңде иң яҡшы көрәшсе тип атауы ауыр.

**Башҡортостан рапирасылары, биатлонсылары, шорттрексылары менән көслө булһа ла, ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса донъя кимәлендә сыҡҡан спортсыларыбыҙ әлегә юҡ шикелле. Венер Ғәлиевты иҫәпләмәгәндә инде...**




- Эйе, Венер Ғәлиевыбыҙ бар, әммә ул элекке мәктәп вәкиле. Уға инде 42 йәш. Венер һымаҡтар күберәк булһын ине лә бит. Йәш, өмөтлө егеттәр барлыҡҡа бар ул. "Тархан" спорт клубында байтаҡ егеттәр шөғөлләнә. Тик уларға матди ярҙам да кәрәк. Әйтәйек, йәштәр үҙҙәренең көндәлек мәшәҡәттәренән арынып, махсус рәүештә спорт менән генә шөғөлләнһә, тау аҡтарырҙар ине. Әлегә уларға эш менән ғаилә, ярыш менән көндәлек мәшәҡәттәр араһында өҙгөләнеп йәшәргә тура килә. Минең үҙемә лә ғаилә менән спорт араһында өҙгөләнергә тура килә ул. Мәҫәлән, Мәскәүҙә бер нисә залда Башҡортостан кешеләренә, милләттәштәргә күнекмәләр үткәрәм. Үҙем ныҡлап шөғөлләнер урынға, тренерлыҡҡа ваҡыт бүлмәй булмай. Ғаиләне ҡарар өсөн башҡа килем алыр ер юҡ.

**Киләһе һорау яп-ябай яңғырай: һеҙҙең өсөн спорт нимә ул?**

- Тормоштоң үҙе... Шулай тиһәм, дөрөҫөрәк тә, аныҡраҡ та булыр. Күптәр спортты, йәшәү рәүешем, тип атай. Был фекер менән дә килешәм. Әммә минең өсөн спорт йәшәү рәүеше генә түгел, ә йәшәүҙең үҙе. Булмыш, тигән билдәләмә лә тап килә. Кеше хыялдарын тормошҡа ашырыу маҡ-

✔ ***Чемпион булыр өсөн үҙеңде-үҙең еңергә өйрәнергә кәрәк. Күнекмәләр үтер өсөн үҙеңде-үҙең еңә алһаң ғына дәғүәсеңде лә еңә алырлыҡ ихтыяр көсөнә эйә булаһың. Һәр иртә үҙеңде мәжбүр итергә, һындырырға тура килә.***



саты менән йәшәй. Ул көндән-көн йә теге, йәки был хыялына яҡыная, йә унан алыҫлаша. Шул, минеңсә, - ғүмер итеүҙер. Спорт минең хыялдарымды тормошҡа ашырыусы уңышлы билет та. Әгәр мин спортҡа килмәһәм, бөгөнгө уңыштарыма өлгәшә алыр инемме - юрамайыҡ. Бәлки, өлгәшер ҙә инем. Минә ҡалһа, спортта үҙеңдең эске мөмкинлектәреңде асыу өсөн шарттар яҡшыраҡ. Һинә сит ҡаршылыҡтар ҡамасауламай - һин һин бары үҙеңде генә еңергә бурыслыһың. Һин егелеп эшләргә тейешһең. Егелеп эшләһәң, ахырҙа, ниндәйҙер һөҙөмтәгә барыбер ирешелә. Спорттың шул яғы минә айырыуса оҡшай.

**Күнекмәләргә күпме ваҡыт бүләһегеҙ?**

- Көн һайын икешәр тапҡыр күнекмә үтәм. Һәр күнекмә 2-3 сәғәткә һуҙыла. Бөтөн аспекттар буйынса ла эшләйем: көрәш буйынса ла, бокс, ирекле көрәш, партер, грепплинг, функциональ әҙерлек, кроссфит, ауыр нәмәләр күтә-

# ЮҠ,

реү һәм башҡалар буйынса. Күнекмә төрҙәре бихисап, шуға күп эшләргә тура килә.

**Мәскәүҙә мәҙәни саралар- ға йөрөргә ваҡыт ҡаламы һуң?**

- Ҡала, ҡала! Театрҙарға, мюзиклдарға йөрөргә яратам. Яңыраҡ "Граф Монте-Кристо" мюзиклына барҙыҡ. Быға тиклем китабын уҡығайным. Шуныһы ҡыҙыҡ булды - китап уҡығанда әҫәр геройҙарын бер төрлө күҙ алдына килтерәһең, ә тамашала уларҙы бөтөнләй икенсе яҡтан асаһың. Яңыраҡ Валерий Золотухиндың пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклгә барҙыҡ. Әсәйем Мәскәүгә килгәндә Джигарханян театрында үткән "Исемһеҙ йондоҙ" пьесаһын кинәнеп ҡараныҡ.

**Һеҙ төрлө тән йәрәхәттәре алыуҙан да һаҡланмағанһығыҙ. Өлкәнәйгәс, берәй эҙемтәләре һаулығығыҙ торошона йогонто яһар, тип ҡурҡмайһығыҙмы?**

- 2011 йылда мин һеңерҙәремде өҙҙөрҙөм һәм 8 айға спорттан ситләшергә мәжбүр булдым. Операция өҫтәлеңә ятырға тура килде. Минә бер ҡарап оҡшай: карапҡа портта хәүефһеҙерәк. Әммә карап бит портта ултырыу өсөн төҙөлмәгән. Шуның кеүек, спорт йәрәхәттәрһеҙ булмай. Йәрәхәттәр алғанда ла һыҙлана-һыҙлана шөғөлләнәм. Ҡытайға барырға әҙерләнгән сағымда ҡабырға-ара невралгияһы һөҙөмтәһендә мануаль терапия алдым. Ә һыҙланыу ҡалды. Ауыртһынһам да, күнекмә үтергә, алышырға тура килде.

Спортта үҙеңде йәрәхәтләйһең, ә ихтыяр көсөң арта. Кеше һәр ваҡыт зарланырға ярата. Уның берәй ере һыҙланымы - дауаханаға йүгерә. Спортсылар - ирекләрәк кешеләр. Уларҙың бөтөн ере лә ауыртырға мөмкин - улар быны күрһәтмәй, белдермәй. Мин йыш ҡына иртәләрен саҡ-саҡ тороп китәм. Ҡайһы бер көндәрҙә көләшем торорға ярҙамлаша. Һыҙлана-һыҙлана залға барып етәм дә, әҙ-мәҙ атлап, йылынып алһам, барыһы ла урынына ултыра.

**Аңды әҙерләү күнекмәләре һеҙҙең әҙерлектең төп өлөшөн тәшкил итә, тигәйнегеҙ...**

- Эйе, иң ҡыйыны күнекмә түгел. Иң ҡыйыны - күнекмәгә барып етеү. Минең тәүге күнекмә иртәнге 8-ҙә башлана. Мәскәүҙә 8-гә залға барып етеү өсөн 6-ла йоҡонан торорға кәрәк. Мин етенсе яртыла өйҙән сығам да, сәғәт ярым ваҡытым юлға китә. Өйгә төнгө ун икелә ҡайтып ауам. Ике, өс ауыр күнекмәнән һуң иртәнге 6-ла тороу - иң ҡыйыны. Бына ошондай мәлдә үҙ аңыңды көйләргә кәрәк тә инде. Чемпион булыр өсөн үҙеңдеүҙең еңергә өйрәнергә кәрәк. Күнекмәләр үтер өсөн үҙеңдеүҙең еңә алһаң ғына дәғүәсеңде лә еңә алырлыҡ ихтыяр көсөнә эйә булаһың. Чемпион булғың килә икән - үҙеңде һәр ваҡыт "һындырырға" тейешһең. Һәр иртә үҙеңде-үҙең мәжбүр итергә, һындырырға тура килә.

**Һинә был спорт төрөнән ҡәнәғәтлек ҡасан килде?**

- Ҡатнаш алыш төрҙәрендә мине иң ныҡ дәртләндергәне - алыштан һуң ҡулыңды күтәреп, һине еңеүсе тип иғлан итеүҙәре. Был тойғоно һүҙ менән әйтеп, аңлатып булмай. Үҙеңдең ниндәй ҙур эш эшләүеңде, ниндәй ауырлыҡтар аша үтеүеңде белеп еңһәң, минең өсөн төп мотивация - шул. Тәүге тапҡыр ҡулымды күтәргән сактарында, "Был бит мин көткән хыял, был минең йондоҙло сәғәтем", тигән аңлауға килдем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һинең өсөн уңышлы заман башҡорто кем ул? Уның сифаттарың һанап кит әле" - әңгәмәбеҙҙең аҙағында ошо һорауҙы төбәнек милләттәшкә. Һәм ошондай яуаптан ҡәнәғәт ҡалдыҡ: "Беҙ ныҡ үҙгәреүсән заманда йәшәйбеҙ. Беҙ ҙә үҙгәрергә тейешбеҙ. Уңышлы башҡорт - үҙгәрештәргә яраҡлаша белгән кеше ул. Хәрәкәтсән дә булырға тейеш бөгөнгө замандың уңышлы кешеһе. Әлбиттә, хәрәкәтсәнлек беҙҙең менталитетта үтә хас нәмә түгел. Башҡорт элек-электән бары тик һуғыштар мәлендә генә хәрәкәтсәнгә әүерелгән. Ләкин беҙгә бөгөн менталитетты үҙгәртеү предметын яңынан ҡарау ҡамасауламаҫ ине. Быны ғалимдар, зыялыларыбыҙ өйрәнергә, халҡыбыҙға ниндәйҙер йәшәйеш йүнәлеше бирергә тейештер, тип уйлайым..."**

*Илгиз ИШБУЛАТОВ*
*әңгәмә ҡорҙо.*

ҠУЛДАН КИЛӘ!

# ЗАЛЫБЫҘҘА...

## француз иҙәне йәйелгән

**Бөрйән районы Әбделмәмбәт урта мәктәбенең физкультура уҡытыусыһы, фоторәссам Зиннур Ғүмәр улы Боҫҡоновто республикала ғына түгел, сит төбәктәрҙә һәм өлкәләрҙә лә яҡшы беләләр. Уның уҡыусылары төрлө кимәлдәге ярыштарҙа ҡатнашып, тәүге урындарҙы яулай. Тағы шуныһы: был төпкөл ауыл мәктәбе ике йыл рәттән спортты һәм физкультураны үҫтереү йәһәтенән республикала иң яҡшы мәктәп исемен алды. Ул ғына ла түгел, 2015 йылда Әбделмәмбәт мәктәбе "Спортты һәм физкультураны үҫтереү буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы мәктәп" тип танылды. Был турала республика матбуғатында, шул иҫәптән беҙҙең гәзиттә лә мәғлүмәттәр булғайны. Бөгөнгө әңгәмәлә беҙ Зиннур Боҫҡоновтан педагогик тәжрибәһе менән уртаҡлашыуын һораныҡ.**



**➔ Тәүҙә уйынлы-ысынлы һорау: физкультура уҡытыусыһы булараҡ, әйтегеҙ әле, "икеле"гә һәм "бишле"гә уҡыусыларҙың айырмаһы һиҙеләме һеҙгә?**

- Улар араһындағы айырма бары журналға ҡуйылған билдәлә генә сағыла. Ә кешелек сифаттарына килгәндә, шул уҡ "бишле"гә өлгәшеүсе лә, "икеле" батшаһы ла рухлы, тәртипле, тәрбиәле, яҡшы кеше була ала. Шулай уҡ ике уҡыусы ла әхлаҡ нормаларын һаңға һуҡмауы бар. Өлгәшеү төрлө сәбәптәр арҡаһында аҡһарға мөмкин. Йә уҡыусыға ғаиләһендә дәрескә әҙерләнерлек шарттар булмай сыға, йә уға атай-әсәй иғтибары етмәй. Шуға ҡарамаҫтан, өйҙәрендә шарттары булмаған уҡыусыларҙың барыһы ла "икеле"гә өлгәшә икән, тип уйлау дөрөҫ булмаҫ ине. Тырышып-тырмашып дәрес әҙерләгән, материалды ҙуллы өйрәнергә атлығып торған, шунлыҡтан уҡыуҙа уңышҡа өлгәшкән уҡыусылар ҙа осрай.

Үҙемдең күп йыллыҡ педагогик тәжрибәмдән сығып, бары шуны ғына әйтә алам: беҙҙең мәктәптә мин тәрбиәләгән шәп спортсы ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында бөтөн предметтар буйынса ла "бишле"гә өлгәшеүселәр булманы. Ләкин улар тормош һынауҙарын башҡаларға ҡарағанда һығылмалыраҡ үтеүҙәре менән айырылып тора. Мәктәп эскәмйәһендә бер урында ултырып сыҙамаған, уҡытыусыларҙың талаптарын үтәй һалып бармаған "тәртипһеҙ" егеттәрҙе генә алайыҡ: ундайҙар әлеге ваҡытта башҡаларҙан өҫтөнөрәктәр, бер ситуацияла ла юғалып ҡалмайҙар. Сөнки "отличник" барлыҡ иғтибарын уҡыуға ғына йүнәлтеп, тиҫтерҙәре менән аралашыуға артыҡ ваҡытын сарыф итә алмай. Ә "икеле"гә уҡыусыны бөтә яҡҡа ла "тартҡылайҙар". Ул бөтөн нәмәгә лә һәләтле, тик уҡырға ғына ваҡыты юҡ.

Баланың "бишле"гә йәки "өслө"гә өлгәшеүе, нисек кенә сәйер тойолһа ла, уҡытыусының үҙенә лә бәйле, минеңсә. Уҡытыусы бәләкәй кластан уҡ баланы "икеле"гә күнектерә икән, ул уны артабан да шулай "баҫаса". "Ул "икеле"гә уҡый, ул минә кәрәкмәй. Мин яҡшы уҡыған бала менән күберәк шөғөлләнәм, уны олимпиадаға әҙерләйем, шуның менән дан алам", - тип уйлап, күп уҡытыусылар "өслө"гә уҡыусылар тураһында онота. Ундайҙар хеҙмәт, физкультура һәм йыр дәрестәре уҡытыусыһы ҡарамағында ҡала. Һәр мәктәптә ошо өс "һанға һуғылмаған" фән бар. Әлбиттә, әгәр уҡытыусы мәктәп коллективы алдында үҙ позицияһын ныҡлы ҡуя алһа, уның предметы "һанға һуғылмаған"дар рәтенә инмәүе лә мөмкин. Әйтәйек, беҙҙең мәктәптә физкультура дәресен балалар һағынып көтөп ала. Әгәр мин төрлө ярыштарҙа булып (Рәсәй кимәлендәге ярыштарға сәфәрҙәр, үҙегеҙ беләһегеҙ, бик оҙаҡҡа һуҙыла), дәресемдә үҙем үткәрә алмаһам, башланғыс класс уҡыусылары илаған осраҡтар ҙа булғылай, тиҙәр...

**➔ Ә үҙегеҙ мәктәптә нисек өлгәштегеҙ?**

- Мин 7-се синыфҡа еткәнсе тик "бишле"гә генә уҡыным. 1986 йылда Американан килгән тәүге уҡыусылар менән бергә "Артек" лагерына ла барҙым. Минең "отличник" булыуымдың сере ниҙә? Математиканан көслө булдым, тип әйтә алмайым. Әммә был фән ауыр бирелгәнгә күрә, тырышыбыраҡ шөғөлләндем, күберәк шөғөлләнергә тырыштым. Минең яратҡан фәндәрем рәсем һәм физкультура ине. Гәрсә, физкультуранан уҡытыусыбыҙ көслө булманы. Беҙҙә бер нәмә лә булманы: дүрт стена, бер йыртыҡ туп. Ана шуларҙы күреп үҫеп тә, Күмертау физкультура училищеһына уҡырға барҙым да инде. Уҡығанда спорт менән шөғөлләнеү ныҡ ярҙам итһә, башҡа фәндәрҙән яҡшы өлгәшеүем әрмелә күп бәләләрҙән ҡотҡарҙы. Мин һәр ваҡытта ла лидерҙар рәтендә йөрөнөм. Бер ҡасан һис кемгә бойһонманым. Мин хеҙмәт иткән 1990-1992 йылдарҙа Чечен республикаһында һуғыш башланып ҡына тора ине. Ә беҙҙең взводта 15 ажар чечен егете хеҙмәт итте. Шуларҙы мин бер үҙем тоттом, малай. Бәләкәс кенәмен, улар - әҙмәүерҙәйҙәр. Исмаһам, береһе лә минә бармаҡ менән дә төртөп ҡараманы. Гәрсә, взводта бөтәһен дә "аҡылға ултыртып" сыҡтылар. Минең отличник булыуым - тарихты, географияны һәйбәт белеүем ярҙам итте. Улар минең эргәгә килә икән, мин уларға шартлатып уларҙың иле тураһында һөйләп бирәм: "Һин шунда тыуғанһың, һеҙҙә шундай тауҙар, шундай йылғалар бар. Батырығыҙ - шул",- тим. Минең һүҙҙәрҙе ишетеп, тегеләрҙең күҙҙәре янып китә: "Беҙ ундай китаптарҙы үҙебеҙ уҡымағанбыҙ! Һин ҡайҙан беләһең беҙҙең халыҡты?" - тип гәжәпләнәләр һәм минә ихтирам менән ҡарай башлайҙар. Әйткәндәй, әрмелә минә бер ваҡытта ла үҙ исемем менән өндәшмәнеләр. Исемем "Башҡорт" булды. Ҡайһы бер йәш һалдаттар минең ысын исемем ысынлап та "Башҡорт" икән тип уйлаған. Берәү өс ай хеҙмәт иткәндән һуң: "Һинең исемең Зиннур икән дә ул!" - тимәһенме! Мин, юрый шаяртып: "Зиннур - минең ҡушаматым бит ул", - тип яуапланым. Шундай ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә була торғайны.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

✓ ***Ышанды Әбделмән ағай хөкүмәттең вәғәҙәһенә. Буш вәғәҙә булып сыҡты. Өйҙән алып сығып киттеләр. Ҡайҙалығын хәбәр итеүсе булманы. Кәримә атаһын уйлап ут йотто. Ҡаҙағстанда ҡалырға өгөтләмәгәне өсөн үкенде.***





**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**

# АДЪЮТАНТ

**Хикәйә**

Ҡыр яҡ - ҡырын яҡ инде. Башҡорт мәктәбе булмағас, урыҫса уҡынылар. Тик атаһы ғына ҡайсаҡ: "Беҙ балаларҙы үҙ телебеҙҙә белем алдырыр өсөн көрәштек. Бында түҙергә тура килә..." - тип әйтеп ҡуя. Кәримә урыҫса уҡыуына ла, яңы власть биргән мөмкинлектәргә лә ныҡ шат, тик шуларҙан мәхрүм итә күрмәһендәр. Ана, башҡорт ғәскәрендә йөрөгәндәрҙе һөрҙөләр, балаларын мәктәптән ҡыуҙылар. Кәримә хәйерселәр, кәмһетелгәндәр араһында йәшәргә теләмәй. Ул үҙен иленә кәрәкле кеше итеп тоя, артыҡ йән булмаясаҡ. Ә атаһы мәктәптән һуң уға милләте, уның тарихы тураһында тылҡый. Был атаһының инаныуы, уның хәҡиҡәте. Уларҙың береһе лә Кәримә йәшәйәсәк йәмғиәткә кәрәкмәй. Шулай тиһә, атай асыулана, ярһый. Ләкин атаға ҡаршы өндәшеү юҡ. Кәримә ниндәй ҙә булһа эш табып сығып китергә тырыша. Мәктәптә оҙаҡлай. Хәҙер Кәримә өйрәнде. Урыҫтар араһында үҙ кеше. Ә атаһының үткәнен белмәйҙәр. Бында ул тыныс, имен тормошта йәшәй.

Бер көн мәктәптән һуң ғына ҡайтып инде. Әсәһе нәмәләр төйнәп булаша. Өй бола. Кәримәнең йөрәге тағы дарҫлап тибергә кереште. "Нимә, әллә уларҙы бында ла килеп таптылармы?" Улай тиһәң, әсәһе йөҙөндә хәүеф-ҡурҡыу сағылмай. Тауышы ла ҡәҙемге.

- Берәй яры йыйынмайбыҙҙыр ул, әсәй?

- Ҡайтабыҙ, балам. Ата-бабалар ватанына.

- Юҡ, әсәй, ҡайтмайыҡ. Атайыма ла шулай тип әйт.

- Балам!.. - әсәһе ултыра төштө. - Ул ни тигән һүҙ? Нисек, ҡайтмайыҡ ти тыуған еребеҙгә? Атайыңа иптәштәре, элекке эштәр өсөн эҙәрләү юҡ, власть үҙе ҡырға киткәндәрҙе кире саҡыра, тип хат яҙғандар. Беҙ бит нахаҡ ғәйептән ҡотолор өсөн генә китергә мәжбүр булдыҡ.

- Бында мәктәптә мин яҡшы уҡыйым.

- Балам, ауылда башҡортса уҡыясаҡһың. Атайың беҙгә үҙебеҙҙең кадрҙар кәрәк, ти. Оҙаҡламай мәктәп тамамлайһың, үҙ телебеҙҙә ғилем алып, тыуған телебеҙҙең дәрәжәһен күтәреп йәшәйәсәкһегеҙ, Алла бойорһа.

- Кәрәкмәй миңә башҡорт теле. Миңә бында рәхәт! - Кәримә ҡысҡырып илап ебәрҙе лә сығып йүгерҙе.

Нишләп һаман атаһы бер балыҡ башын сәйнәй? Тыуған ер, тыуған ер, имеш. Ни өсөн иҫкелеккә сат йәбешкән? Улар ҡеүәтле совет илен төҙөй, бөтөн ерҙә яңы тормош гөрләй. Совет иле - донъя ғорурлығы. Бүтән илдәр уларҙан өйрәнә. Ниндәй милли кадр? Ниндәй тыуған тел? Атаһы һаман артҡа ҡараған килеш йәшәй бирә.

Әбделмән ағай һуң ғына ҡайтты, кәйефе күтәренке. Боронғо көйҙө һыҙа. Вәлидиҙең яратҡан йыры, ти торғайны. Аңлашыла. Атай кеше һаман бер үк бурысты атҡарыуын дауам итә. Үҙ балаларын шул рухта тәрбиәләп маташа. Әсәһе һәр саҡ уның яҡлы. Шуға ла Кәримәнең, тыуған яҡҡа ҡайтмайыҡ, тип, үсегеп сығып киткәнен әйтмәгән. Йәшерә әсәһе иренән ундайыраҡ һөйләшеүҙе... Бер аҙ ултыра биргәс, Кәримә лә һыуынды. Атаһының белмәүе лә хәйерлерәк тә. Бер яҡтан йәлләнес, атаһы бит яңғыҙ. Арҡаҙаштарынан, бергә көрәшкән дуҫтарынан берәү ҙә тиерлек ҡалмаған. Кемдәрелер һуғышта һәләк булған, кемдәрелер ҡырға сығып киткән, кемдәрелер һөрөлгән, кемдәрелер атылған, хәбәрһеҙ юғалған... Атаһын ниндәйҙер көс был ғәрәсәттән һаҡлай. Әле лә шуға өмөтләнәме? Нәмәләрҙа арбаға тейәгән ыңғайға атаһы шулай ти:

- Минең малайҙар урыҫса уҡып, башҡортса насарыраҡ һөйләшә башланылар. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙе белмәйҙәр ҙә. Башҡорт улы үҙ телендә иркен һөйләшергә тейеш. Автономияны беҙ нимә өсөн яуланыҡ? Шунһыҙ беҙ юҡ. Минең өсөн был хурлыҡ! Хатта йәшәүемдең мәғәнәһе ҡалмай. Тимәк, балаларыма үҙ илемдә үҙ телемдә белем бирер өсөн ҡайтырға тейешмен. Үҙ телендә насар һөйләшкән ул ниндәй башҡорт? Ата-бабаларым ҡәберҙә әйләнер был хурлыҡтан. Улар бит телде, иманды һаҡлай алғандар!

Ышанды Әбделмән ағай хөкүмәттең вәғәҙәһенә. Сираттағы буш вәғәҙә булып сыҡты. Өйҙән елтерәтеп алып сығып киттеләр. Ҡайҙалығын хәбәр итеүсе булманы. Кәримә атаһын уйлап ут йотто. Ҡаҙағстанда ҡалырға өгөтләмәгәне өсөн үкенде. Бына хәҙер төрмәлә һорау алаларҙыр, үткән эштәре тураһында белешәләрҙер. Тик яҙалай ғына күрмәһендәр. "Әгәр ҙә атам ҡаҫҡан сағыбыҙҙа, юлда, биш чекисты атып үлтерееүен әйтһә, беребеҙгә лә аяу булмаясаҡ. Хәйер, ул бит сыҙам. Өндәшмәҫ. Моғайын, ҡайтарырҙар." Тик атаһы әйләнеп ҡайтманы. Ҡош телендәй хәбәр ҙә килмәне.

Бер көндө мәктәп директоры уларҙың өйөнә үҙе килеп инде. Өҫтән бер кеше килеүен, Кәримәне һөйләшергә саҡырыуын әйтте. Кәримәнең аяҡ аҫтында ер убылдымы ни!

Ҡаланан килгән вәкил мыҡты кәүҙәле, үткер ҡарашлы ир ине. Һары сәсе майлап һалынға тиерһең. Өҫтөндә гимнастерка.

- Здравствуйте!.. - тине ҡыҙ көс-хәл менән. Яуапты алғас, теге кеше Кәримәгә яҡынырaҡ килергә ҡушты, эргәһенән урын күрһәтте. Теҙ быуындары ҡалтырауын һиҙҙермәҫкә тырышып, ҡыҙ яй ғына уға табан атланы. Тәҙрә янында ултырған икенсеһе башҡорт булып сыҡты.

- Яҡынырaҡ кил, яҡынырaҡ, - тип ҡабатланы башҡортса.

- Совет власына ауылда нисек ҡарайҙар? - тип һораны вәкил һәм, тәржемә ит, тигәндәй ярҙамсыһына ҡарап алды. Ләкин Кәримә тегенеһенә ауыҙ асырға ла ирек бирмәй урыҫса тәтелдәргә кереште:

- Атайым мине аңлы рәүештә рус мәктәбенә бирҙе, сөнки беҙ - берҙәм совет халҡы, иң гуман йәмғиәт төҙөүселәр. Шуға ла мин башҡортса аңламайым. Совет берлеге беҙҙән башлана. Бөтә донъя пролетарийҙары берләшәсәк. Урыҫ теле аралашыу теле. Уны яҡшы белеү - минең өсөн коммунизм идеяһына тоғролоҡ! Сөнки ул бөйөк Ленин теле.

Кәримә үҙен бүлдермәйенсә туҡтаманы. Вәкил ҡабатлап исем-фамилияһын, ғаилә хәлен һораны. Ҡыҙ иһә бытырланы ла бытырланы. Ниндәй китаптар уҡығанын, ни өсөн уҡығанын, бөгөн совет власына кемдәр, ниндәй империалистар янауын, йәштәр атҡарасаҡ бурыстар, устав, ниндәй идея, тәғлимәт өсөн көрәшкәндәрен, коммунизмдың ниндәй буласағын - быларҙың бөтәһен дә ул яттан белә.

- Атайыңдың үткән юлы тураһында нимә әйтер инең? - вәкилдең күҙҙәре хәйләкәр йылмая.

- Йәш саҡта атай ниндәй булғандыр, беҙгә мәғлүм түгел, ләкин ярлы сығышлы булыуы тәғәйен асыҡ. Яңы тормош төҙөүселәрҙең береһе, әүҙемсе. Ул һәр саҡ ғәҙеллек принцибын алға һөрә, синфи дошмандарға көрәшеү - иң изге бурыс, тип әйтә, әгәр ҙә нимәнелер белеп бөтмәһәм, совет власы бөтәһен дә асыҡлар.

- Һине мәктәптә актив комсомолка, тинеләр. Ә юл йөрөргә йыш тура киләме? - тип һораны чекист.

Кәримә тертләне. Ҡапыл күҙ алдында атҡа Ҡаҙағстанға илткән юл пәйҙә булды. Уйланырға ваҡыт юҡ ине.

- Мин тик бер генә юлды беләм. Революция юлын. Любовь Яроваялар һайлаған тоғролоҡ юлын. Комунизмға илтәсәк юлды. Башҡалары юл түгел, һуҡмаҡ ҡына.

Ҡыҙҙан күҙен алмаған чекист артҡа терәлеберәк ултырҙы, әлеге ҡыланышы нимәне аңғарта? Яуабы оҡшанымы, әллә бындай яуапты көтмәнеме икән? Артыҡ уйланырға ваҡыт юҡ ине. Һәм Кәримә дауам итте.

- Бөйөк Ленин һыҙған юлдан барыу бөгөнгө һәр йәш кешенең бурысы.

Уның эсенә инеп китерҙәй булып текләгән вәкил, туҡтарға ҡушып, ымланы. Ярҙамсыһы ишеккә күрһәтте, тимәк, Кәримәне ебәрәләр. Ҡыҙ, исмаһам, артына бер тапҡыр боролоп ҡараһасы! Юлды күрмәгән килеш атланы ла атланы. Эстә тороп ҡалған был икәү аҙаҡ уның тураһында нимә тинеләр икән? Өйгә нисек килеп ингәнен, урындыҡҡа нисек килеп ҡолағанын да хәтерләмәй... Төнө буйы аяғы ҡорошто, иртәнсәк баҫырға иткәйне ауыртыуға түҙмәй яман итеп аҡырып ебәрҙе. Әсәһе эргәһенә йүгереп килеп етте:

- Ни булды, балаҡайым? Һиңә ҡағылыусы булмағандыр бит?

- Аяғыма баҫа алмайым, әллә нимә эшләне лә ҡуйҙы! - тип үкһене ҡыҙ.

- Ҡуй-ҡуй-ҡуй, барма бөгөн мәктәпкә. Йөрөмә.

- Юҡ! - Кәримә нисек һикереп тороп баҫҡанын да һиҙмәй ҡалды.- Бөтөнөһөнә үс итеп, уҡырға йөрөргә тейешмен!

Бынан ары уны саҡырыусы, допрос алыусы булманы. Атаһының ун йылға Себергә һөрөлөүен ауыр кисерҙеләр, әлбиттә. Шулай ҙа ҙур ғаилә берҙәм булды, бирешмәне. Әсәһе тырышлығы менән аслыҡты ла, юҡлыҡты ла еңделәр, мәктәпкә йөрөнөләр.

Икенсе донъя һуғышы башланғанда ир туғандары шаҡтай ҙурайып ҡул араһына ингәйне. Һөргөндән атаһы яҙған хаттар ҙа килде. Фронтҡа ебәреүҙәрен һорап төрлө органдарға мөрәжәғәт иткән. Хатта Сталин иптәштең үҙенә хат яҙған. Өйгә ебәргән хатында шундай юлдар бар ине: "Мин бит снайпер. Дошманды юҡ итеүҙә үҙ өлөшөмдө индерә алам... Снайпер. Эйе, атаһы мәргән. Бер тапҡыр әсәһе: "Атағыҙ әкиәттәге Кирәй Мәргән ул. Ә батырҙы аңһат ҡына үлтереп булмай, ул юҡбар дошман ҡулынан һәләк булмаясаҡ, " тигәйне.

Ысынлап та, 43 йылда атаһын фронҡа алдылар. Бүтәндәр, ирҙәре йәки аталары һуғышҡа алынһа, ҡан-йәш түгеп илап оҙатырҙар ине. Кәримә был хәбәрҙе ҡыуаныс менән ҡабул итте, атаһы совет власы алдындағы ғәйебен үҙ ҡаны менән йыуасаҡ. Был ғәйеп тойғоһо Кәримәлә лә йәшәй, уға тыныс көн итергә ирек бирмәй. Күңелгә шундай уй ҙа килеп ҡуя: "Үлһә ни, үлә лә ҡуя инде. Һуғыш үлемһеҙ булмай. Уның ҡарауы, балаларының тормошо тыныслыҡта үтер. Һуғышта һәләк булды, тиеү бер ҙә насар яңғырамай ҙа баһа..." Шул саҡ эсен нимәлер сыйып-көйҙөрөп үтте. Тфү-тфү, атай тураһында былай уйлау көфөр! Күргән-кисергәндәр әллә ниндәй уйҙарға төшөрә... Кәримә таш бәғерле түгел. Ул атаһын йәлләй ҙә. Сөнки күпме эш атҡарҙы, тау-таш аҡтарҙы. Ҡайҙа ҡушһалар, шунда булды, юҡты бар итте. Уның хеҙмәте менән ил файҙаланды. Тик барыбер артыҡ кеше булып ҡалды. Бөтөн нахаҡты сабыр кисерҙе, намыҫына тап төшөрмәне. Халыҡ мәнфәғәте, хөрриәт, милләт, тип яныуы уның яҙмышын ҡара һөрөм менән сорнаны.

* * *

Ә атаһын фашист пуляһы алманы. Һуғыштан ул иҫән-һау әйләнеп ҡайтты. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың оло быуынын тәшкил иткән яугир һынатманы, күкрәгенә орден-миҙалдарын тағып аяҡ баҫты кескәй ватанына. Был ваҡытта Кәримә балиғ булып, Өфөлә институтта уҡый ине. Атаһын ҡайтып күргәс, ҡыҙғаныуҙан эсе өҙөлдө. Балаҫ йәйелгән урындыҡта ҡураныс ҡына кәүҙәле, ап-аҡ сәсле ҡарт ултыра. Тик башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итеүе мәңгелек тамға итеп баҫылдымы, уны тағы ла алып киттеләр, һәм Сталин вафатынан һуң ғына ғаиләһенә әйләнеп ҡайтырға рөхсәт бирҙеләр. Совет илендә белем алған һәм кеше булған Кәримә атаһының мөһөрө үҙенә йоғоуҙан шикләнде шикелле, тыуған ауылына һирәгерәк ҡайтты.

Шуныһы ғәжәп, ниндәй яҙалар кисерһә лә, ниндәй ыҙалар күрһә лә, Әбделмән үҙ ҡарашынан ваз кисмәне. Тыйылған исемдәрҙе ҡабатланы. Һаман башҡорт армияһы, көрәштәштәре тураһында һөйләне, уларҙы иҫләне. Уның хәҡиҡәте күптәргә аңлашылманы. Кәримә лә шулар иҫәбенә булды. Ә атаһы өлкән ҡыҙын ятты. Тормош юлын уға бәйән итергә, уның менән уртаҡлашырға тырышты. Тик Кәримә: "Атай, икенсе ваҡытта иркенләп һөйләшербеҙ", тип, һылтауын да табыр ине. Нишләп һаман шул бер нәмәне сәйнәй икән, тип асыуланған сағы ла булды. Тора-бара, атаһы мулла булып китте. "Дин - ағыу", тигән көслө пропаганда заманында, ҙур темптар менән индустриялаштырыу барғанда был эшмәкәрлеге шулай уҡ ҡай берәүҙәр өсөн сәйер тойолдо. Уның ҡарауы, иманлы, миһырбанлы, ғәҙел мулланы ауылдаштары ҡәҙерләне. Атлауына ҡартлыҡ инһә лә, күҙҙәре элеккесә үткер ине, асыуланған сағында был кейек күҙҙәрҙә осҡон ҡабынғандай була.

**(Дауамы бар).**

✓ *Әсәһе урыҫса белмәгәс, Сания апайға йүгерә, улының һүҙҙәрен ул тәржемә иткән. Бер нисә көн шулай дауам иткәс: "Хватит, Хәйҙәр, минең дә урыҫсам бөттө, дауай, башҡортса һөйләшәйек тә ҡуяйыҡ", - тигән ти аптырағас.*



## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

**"Киске Өфө"сыға башлаған мәлдән йәшәй гәзит биттәрендә "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" рубрикаһы. Көн һайын яуып томаһа ла, төрлө мәҙәк хәлдәр тураһындағы хаттар килеп тора. Мәҙәк хәлдәрҙе уҡығас, ығы-зығылы донъя яҡтырып, күңелгә еңел булып ҡала. Халыҡ юморы шул хәтлем эскерһеҙ, ябай. Төрлө "шаҡҡатыризм"дар юҡ унда - уҡы ла, кинән. Шуныһы ҡыуаныслы: мәҙәк хәлдәрҙә башҡорт халҡына хас булған ихласлыҡ, эскерһеҙлек, кинәйә һөйләп, рәнйетмәҫлек итеп тура әйтә белеү, ҡатмарлы ситуацияларҙа юғалып ҡалмау, төшөнкөлөккә бирелмәү кеүек матур сифаттар ярылып ята. Шулай итеп, "Башҡорт юморы" тип аталасаҡ китап ҡалыная бара.**




## БАЙМАҠ МӘҘӘКТӘРЕ

### Үлер ине...

Ҡыҙмаса булып алған егеттәр нимәгәләр килешә алмай, һуғышып китәләр. Кемдер Хажиәхмәттең башына балта менән тондора. Ул башын тотоп ҡайтып ингәс, әсәһе:

- Уй, балаҡайымдың башына алай ҙа балта төйҙәһе менән генә һуҡҡандар. Йөҙө менән һуҡһалар, үлер ҙә ҡуйыр ине бит, - тип тынысланып ҡуйған.

### Урамдары тап-таҙа

Ғәбиҙә инәй Мәскәүгә беренсе ауыл хужалығы күргәҙмәһенә барып ҡайтҡас, ауыл халҡына Мәскәү тураһында иҫе китеп һөйләй икән. "Мәскәүҙә иң матур урын Ҡыҙыл Майҙан, унда Кремль тора, Мавзолей, уның тирәһендә нәҡ беҙҙең Бурһаҡ ташы кеүек үҫкән бабайҙар тора. Тик Марксты ғына таныным, башҡаларының кемлеген белә алманым. Шуныһы шәп: Мәскәү урамдары тап-таҙа инде хатта, бер генә бөртөк кәзә кәнфите лә күренмәй", - тип һөйләй икән.

### Йәйәү йөрөйәсәкһең

Бер көн иртә менән Зәйнетдин ағай кис тышап ҡалдырған атын алырға тип Тоҡан һаҙына барһа, унығын бүре ашап киткән була. Бер ҙә бошонмаған ағай: "Эй, бүре, бүре, минең атты ашау менән ней ҡылдың инде, үҙеңә насар эшләнең бит. Мин янынан ат алырмын ул, ә бына һин гүмер буйы йәйәү йөрөйәсәкһең бит", - тип үҙ алдына һөйләнеп ҡуйған.

### Һынып торғандыр

Яңы ғына һуғыштан ҡайтҡан Закир ағайҙы Мәфтүхә апай һыйыр йығышырға саҡыра. Һыйырҙың аяҡтарын салып элеп тартҡан ыңғайы уныһы Закир ағайҙың аяғына йығыла.

- Эй, килен, аяҡ һынды шикелле, - ти ул.

Аяғын мал аҫтынан һөйрәп сығарып, итеген систереп, силғауын тағатып ҡараһалар, ысынлап та, уның аяғы сурт һынған була.

- Уй, ҡайнаға, ул аяғың элек һуғышта һынып торғандыр ул, яңы ғына һынмаҫ, - тигән Мәфтүхә апай уның аяғын күреп.

### Урыҫсам бөттө

Хәйҙәр армиянан башҡортса һөйләшергә онотоп ҡайтҡан. Әсәһе урыҫса белмәгәс, Сания апайға йүгереп бара ла етә икән. Уныһы үҙе белгәненсә улының һүҙҙәрен тәржемә иткән. Бер нисә көн шулай дауам иткәс: "Хватит, Хәйҙәр, минең дә урыҫсам бөттө, дауай, башҡортса һөйләшәйек тә ҡуяйыҡ", - тигән ти аптырағас.

### Аяғымдан башлаһындар

Таһира инәй Түбә баҙарынан ҡайтып килгәндә Ирәндек башындағы аҡланда бүреләргә тап була. "Ярар, Аллаға тапшырам, был ас бүреләрҙән ҡотолоп булмаҫ, ошонда ғына ятайым да, доғаларымды уҡый торайым. Ашаһалар, аяғымдан башлаһындар, башым доға уҡырға кәрәк, ясин сыға торайым", - тип башын ауылы менән урай ҙа, ҡиблаға ҡарап, сәждәгә киткән һымаҡ ята.

Бер аҙ ваҡыт үткәс, ҡараһа, бүреләрҙән елдәр иҫкән була.

Шулай итеп, бер үлемдән ҡотола ул. Аҙаҡ: "Алай ҙа аяғымдан ашай башлаһындар, тип әйткәнмен, былайһа...",- тип тә һөйләп йөрөгән, имеш, Таһира инәй.

**Миҙхәт БАЙРАМҒОЛОВ.**

## ҒАФУРИ МӘҘӘКТӘРЕ

### "Не шути, Ғәйзулла!"

Ауылда Ғәйзулла тигән бабай вафат булған. Ғәҙәт буйынса, бөтә ауыл халҡы хәйер һалырға, туғандарының ҡайғыһын уртаҡлашырға килә. Кисен ҡарттар мәйет эргәһендә ултырып ҡала. Бер аҙ ултырғас, тәмәке тартыусылар урамға сығып китә, үҙ ғүмерендә тәмәкене ауыҙына ла алмаған Ғәбделхай бабай бер үҙе мәйет эргәһендә ҡала. Белгән аяттарын уҡып, күршеһенең йөҙөнә ҡарап, шөрләнкерәп ултырған Ғәбделхайҙың күҙенә караuат һелкенә башлағандай тойола. Был ни хәл, тип күҙен йомоп та ҡарай, асһа, караuат тағы һелкенә башлай. Шул саҡта йөрәге тамам туҡтарға етә башлаған Ғәбделхай: "Һин не шути, Ғәйзулла, үлгәнһең бит инде", - тип, урамға ташлана.

Урамдағы ҡарттар эштең нимәлә икәнлеген төшөнөргә теләп, караuат аҫтына күҙ һалһалар, унда яңы ғына донъяға килгән ике быҙау яткан икән. Улар торорға итқән саҡта караuатты бер аҙ ҡалҡытып ҡуйғандар икән. Хәҙер Ғәбделхай ағайҙың үҙен "Не шути" тип йөрөтәләр.

### "Бармағы осонан һыу аға"

Ул йылды Мансур Әхмәҙуллович уҡытырға беренсе класты бирҙеләр. Мансур ағай бер көндө тәнәфестә ир уҡытыусыларҙы йыйып алды ла зарлана башланы.

- Егеттәр, мин ҡартая башланым, ахырыһы, бөгөн бик ҙур хата ебәргәнемде аңланым әле. Беренсе кластарҙы ҡабул иткәс, уҡыу йылы башында уларҙы иң тәүҙә нимәләргә өйрәтергә икәнлекте онотоп ебәргәнмен.

- Нимә булды һуң, нимдәй хата? - тибеҙ.

- Әүәлдәге тәртип буйынса, малайҙар менән ҡыҙҙарҙы бергә ултыртабыҙ бит инде, мин дә шулай иттем дә, дәресте башлап ебәрҙем. Дәрестең яртыһы үтеп бара, шунда артҡы партала ултырған ҡыҙ бала: "Уҡытыусы ағай, Рәфҡәттең бармағынан һыу аға башланы", - ти. Йүгереп барып ҡараһам, ҡыҙ баланың эргәһендәге малай енелсә "эш" бөтөрөп ултыра имеш. Бына шунда аңланым инде хатамды. Ғәйеп миндә бит, балаларға иң башта тыштағы туалетты күрһәтергә тейешлекте, нисек һорап сығырға икәнлекте аңлатырға тейеш инем, онотоп ебәргәнмен, - тип үҙен ғәйепләне ҡарт уҡытыусы.

### "Уйсан Сәлимйән"

Ауыл клубында йылына бер тапҡыр шахмат турниры булып ала торғайны. Сәлимйән ауылда бик азарт шахматсы иҫәпләнә. Турнир графигы буйынса бөгөн ул колхоз рәйесе Мәжит Сәләхетдин улы менән уйнарға тейеш. Ниһайәт, былар клубта осрашып, уйнарға ултыралар. Уйындың уртаһына еткәс, Сәлимйән ағай йөрөшөн таба алмай интегә. Партнерының түҙемлеге бөтә, сәғәт киске 9 тулып килә, колхоз идараһының ултырышын үткәрәһе иҫенә төшә. Шунан ул: "Ярай, Сәлимйән ағай, һин уйлай тор, ултырыш үткәреп килләйем әле", - тип идараға китә.

Сәғәт ярымдан һуң Сәләхетдинович килеп инә, Сәлимйән ағай һаман йөрөшөн яһамай, "Әҙерәк уйлайым әле", тип тик ултыра. Шулай итеп, ул көндә, артыҡ ваҡыт исраф итеү сәбәпле, Сәлимйән ағай еңелеүен танырға мәжбүр була.

Иртәгәһен Сәлимйән ағай ырҙын табағындағы иген тейәлгән машинаға ултырып, Аҡкүлгә үҙ йомошо менән китә. Юлда барғанда ла теге уйыны иҫенән сыҡмай. Кинәт, Табын ауылына килеп еткәс, төшөп ҡала ла, иген бушатып ҡайтып килгән машинаға ултырып, кире ҡайтып китә. Ырҙын табағында йөрөгән колхоз рәйесен табып: "Мин кисә ат менән йөрөгән булһам, Мәжит Сәләхетдинович, һиңә мат була ине", -тип әйтә лә кире Аҡкүлгә китә. Шунан һуң Сәлимйән ағайға "Уйсан" тигән почетлы исем тағыла ла инде.

**Марат БАЙМӨХӘМӘТОВ.**

## МӘЛӘҮЕЗ МӘҘӘКТӘРЕ

### Һөт ташыусы

Был хәл 1957 йылдың ноябрь аҙаҡтарында була. Бер йөш кеше, пар ат егеп, ете саҡрым алыҫлыҡтағы күрше ауылға һөт ташый икән. Бер көн, һөтөн тапшырып, ҡайтырға сыға. Ярты юлда ирле-ҡатынлы икәүҙе ҡыуып етә. Һаулыҡ һорашалар, һөт ташыусы уларҙы ултыртып ала.

- Ҡайҙа китеп барағыҙ?

- Ҡайҙа булһын инде, бәхет эҙләп сыҡтыҡ, - тип, шаярыу ҡатыш яуап бирә юлсылар. - Барабыҙ ҙа барабыҙ әле...

- Кис етә бит, ҡайҙа ҡунаһығыҙ?

- Янбраҡ өс туған һылыуыбыҙ Әбеткә килен булып төштө.

Үҙ ауылын яҡшы белгән һөт ташыусы ҡыҙыҡһына:

- Кем һуң ул?

- Исеме Ғәйшә булыр.

- Ә кейәүегеҙ кем?

- Исемен белмәйбеҙ әлегә. Былай кейәүҙе бик яҡшы, тип маҡтайҙар.

- Ғәйшәне беләм. Бик уңған ҡатын. Тик кейәүе ул хәтлем маҡтағандай түгел.

- Ә, улай икән... - тип, юлаусылар аптырай төшә.

- Бик булмаһа, үҙебеҙгә алып ҡайтайым.

- Әллә инде. Үт әй, маҡтаған булалар бит әле. Барғас, аҡылға ултыртам мин уны, - тип, ҡатын юл буйына кейәүен әрләп, һөйләнеп килә.

Һөт ташыусының асыуы килә башлай. "Әллә төшөрөп ҡалдырырға микән", - тип уйлап та ҡуя. Шулай ҙа һыр бирмәй.

- Ярай, үҙебеҙгә алып ҡайтам, - ти.

- Ҡатының ни тиер һуң?

- Ҡаршы алыр әле...

Елдереп, ауылға килеп инәләр. Һөт ташыусы үҙҙәренең ҡапҡа алдына килеп туҡтай.

- Ғәйшәү, ҡатын, ҡапҡаны ас, ҡунаҡтарҙы ҡаршы ал, - тип ҡыҫҡыра ул.

Ғәйшә йүгереп сығып, ҡапҡаны аса.

- Ә-ә-ә, апайымдар килгән, - тип, туғандарын ҡосаҡлап ала.

Күрешәләр, бер-береһенең хәлен белешәләр. Шул саҡ ҡатын ат туғарып йөрөгән һөт ташыусыға иғтибар итә.

- Ә был кем була һуң?

- Бәй, ошо инде кейәүегеҙ. Юлда танышманығыҙмы ни?

Ирле-ҡатынлы ҡунаҡтар аптырап ҡала.

- Ә беҙ бит уны юл буйы әрләп килдек...

(Был мәҙәкте йөш сағында һөт ташыған Арыҫланов Тимербай бабай үҙе һөйләне).

### Айыу сыҡты

Элегәрәк беҙҙең ауылда бер урыҫ ғаиләһе йәшәгән. Ул саҡтарҙа ҡышҡылыҡҡа утынды йәй әҙерләү тигән нәмә булмаған. Ҡышҡы сатлама һыуыҡ төндә урыҫ Вася менән Рамаҙан исемле башҡорт урманға утын урларға бара. Урманға барып еткәс, ябыныш килгән толоптарын атҡа ҡаплайҙар ҙа, ағас ҡырҡырға тотоналар. Бер саҡ болоттар араһынан түп-түңәрәк тулған ай килеп сыға. Рамаҙан: "Ана, ай ҙа сыҡты", - тигән. Башҡортса аҙ-маҙ һупалай белгән Васька быны "айыу сыҡты", тип аңлай ҙа, санаға менә һалып та ултыра. Урыҫтың ҡыланышынан өркҡән ат ауылға табан саба башлай. Ат өҫтөндәге толоп һыпырылып төшөп ҡала. "Ҡалай һелтәнә, саҡ ҡотолдом. Бахыр Рамаҙан әрәм булды инде", - тип уйлай Вася. "Аһ-аһ, был Васяға нимә булды?" - тип аптыраған Рамаҙан толобон һөйрәп ҡайтырға сыға.

Ә был ваҡытта Вася ауылға ҡайтып, Рамаҙанды айыу таланы, тип, халыҡты уята. Ауыл халҡы һәнәк-мәҙәр менән ҡоралланып, һай-һайлап, урманға юллана. Рамаҙан ҡыҫҡырышып килеүселәрҙе, утын урлағанды һиҙеп, урмансылар уны тоторға килә икән, тип уйлай һәм толобон ябынып, ағас араһына боҫа. Ҡара төн уртаһында ҡуҙғалып сыҡҡан ауыл халҡының да, урыҫ Васьканың да ҡышҡы сатлама һыуыҡта урман уртаһында айыу йөрөүе мөмкин түгеллеге уйҙарына ла инеп сыҡмай.

### Исмаһам, һин танымағанһың...

Был хәл бер нисә йыл элек була. Беҙҙең ҡаршыла йәшәгән Рауза инәйҙең көтөүҙә һыйыры ауырып ҡайта. Эт егеп, бесән мисәп, тигәндәй, ул һыйырҙы кәс-хәл менән көтөүҙән алып ҡайта. "Ауырығас, һыйырымдың хатта төҫтәре үҙгәреп киткән", тип күршеһенә инеп һөйләп сыға. Мөршиҙә әхирәтен саҡырып алып, икәүләп һыйырҙы өшкөрөп, тоҙло-шәкәрле һыу, сүпрә эсереп, мәж килләләр. Кискә табан һыйырҙың хәле һәйбәтләнә, ул көйшөй башлай. Кис көтөү ҡайта. Рауза апайҙың һыйыры, ғәҙәттәгесә, иң алдан ҡайтып, ҡапҡаны мөгөҙө менән төртөп асып, ихатаға килеп инә. Бәхтиһең, "духтырҙар" бөтөнләй икенсе кешенең һыйырын дауалаған икән.

- Минең һыйыр түгеллеген, исмаһам, һин белмәгәнһең... - ти икән аптыраған Рауза апай үҙенең әхирәтенә.

**Резеҙә КҮЗБӘКОВА.**

✓ *Мин ул ваҡытта милли кейемдең ниндәй мөғжизәле ҡеүәткә эйә булғанын күҙ алдыма ла килтермәгәйнем. Берҙән, ул ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йөҙөнә ҡот ҡундырҙы; икенсенән, ошо кейем ҡатын-ҡыҙҙы иман нурына төрҙө лә ҡуйҙы.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЛИМОН ЕҪЕ...

## тынысландыра

■ Кларксон университеты хеҙмәткәрҙәре какао һәм кофеиндың кешенең когнетив һәләттәрен, иғтибарын арттырырға ярҙам итеүен асыҡлаған. Бер йыл дауамында 24 кешене даими рәүештә кофеинһыҙ һәи кофеинлы какао, ҡаты итеп яһалған ҡәһүә һәм плацебо-коктейлдәр менән һыйлағандар. Тәжрибәлә ҡатнашыусылар ҙа, уны үткәреүселәр ҙә сынаяҡтарҙа ниндәй эсемлек икәнен белмәгән. Һуынан ҡатнашыусылар бер нисә тест эшләгән. Какао эсеүселәр башҡаларға ҡарағанда хаталарҙы аҙыраҡ ебәргән. Кофеинлы какао эсеүселәрҙең һәҙемтәһе иң яҡшыһы булған. Ғалимдар билдәләүенсә, кофеин менән какао ҡатнашмаһы шуныһы менән дә яҡшы - ул хәүефләнеү тойғоһо уятмай. Шуға ла ҡәһүәне шоколадҡа ҡушып эсеү файҙалы.

■ Ғаилә ҡороп йәшәүселәрҙең сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ була. Яңы тикшеренеүҙәр фәндә беренсе тапҡыр никахтың кеше сәләмәтлегенә ыңғай тәьсир итеүенең сәбәптәрен аңлатыусы биологик мәғлүмәттәр аса. Өҙайлы психик көсөргәнеш кортизол күләме күтәрелеү менән бәйле, ул күп ауырыуҙарҙың барлыҡҡа килтереүсе процессы әүҙемләштерә. Карнеги-Меллон университеты ғалимдары 21-55 йәштәге 572 сәләмәт кешенең кортизол кимәлен тикшергән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, өйләнгән ир-атта айырылған, тол ҡалған ир-егеттәрҙекенә ҡарағанда кортизол күләме түбән була. Шулай көн дауамында кортизол нисек үҙгәреүе лә тикшерелгән. Иртән кеше уянғас та был гормон нормала була, көн дауамында түбәнәйә. Өйләнгән кешеләрҙә ул тиҙерәк түбәнәйә икән. Кортизол ни тиклем түбәнерәк, кеше йөрәк һәм онкологик сирҙәргә шул хәтлем бирешмәүсән була.

■ Американың ғаилә һәм хеҙмәт институтында үткәрелгән яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡыҫҡа эш көнө хеҙмәткәрҙәр өсөн дә, ойошма өсөн дә файҙалы. Аныҡлап әйткәндә, медицина йәһәтенән сығып ҡарағанда, офиста оҙаҡ ултырыу йөрәккә насар тәьсир итә. Аҙнаһына 55 сәғәт һәм унан да күберәк эшләүсе кешелә аҙнаһына 40 сәғәт эшләүселәргә ҡарағанда инсульт хәүефе 33 процентҡа юғарыраҡ. Бынан тыш, тик эш менән генә шөғөлләнеүселәр насар йоҡлай, шуға ла тиҙерәк арый. Иң мөһиме, ти ғалимдар, кем оҙағыраҡ ял итә, улар һөҙөмтәлерәк эшләй.

■ Япония ғалимдары ҡайһы бер еҫтәрҙең кешенең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһауын, хатта ҡандың химик составын үҙгәртергә һәләтле булыуын раҫлаған. Мәҫәлән, стресс ваҡытында үҙеңә оҡшаған эфир майының еҫе көсөргәнештән арындыра, тынысландыра, депрессиянан ҡотҡара. Бер төркөм ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, лимон, манго, ала миләүшә еҫе тап ошо сифаттарға эйә.

■ Гел дөрөҫ туҡланмау һимереүгә генә түгел, хроник арыу һәм ялҡаулыҡҡа алып килә. Лос-Анджелестың Калифорния университеты ғалимдары ярты йыл буйына лабораторияла ҡомаҡтарҙа һынау үткәргән. Уларҙы ике төркөмгә бүлгәндәр, тәүге төркөм - шәкәрле, майлы, ҡыҙҙырылған ризыҡтар, икенсеһе сәләмәт аҙыҡ менән туҡланған. Тәүге төркөмдәге ҡомаҡтар эксперимент аҙағына һимергән. Ҡомаҡтарҙы билдәле бер шарттарҙа һалмауырға баҫырға өйрәткәндәр, шул саҡта ул ниндәйҙер бүләк - һыу йәки ризыҡҡа лайыҡ булған. Ярты йылдан һуң улар был бурыстарын насарыраҡ үтәй башлаған. 30 минутлыҡ күнекмә ваҡытында улар йышыраҡ ял иткән. "Йәки фастфуд ялҡаулыҡ һәм арыуға килтерә, йәки уның һөҙөмтәһендә һимергәндән һуң улар ялҡауға әйләнә", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Аарон Блейсдел.

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# ҺАУЛЫҠ САРАЛАРЫ...

## йәнтөйәгебеҙҙә

**Учалы районында йәшәһәм дә, Мансур ауылын күргәнем юҡ ине. Көтмәгәндә юл төштө: үҙебеҙҙең Уральск ҡасабаһы ағинәйе Гөлниса Марс ҡыҙы Мансур ауылы ағинәйҙәренең "Үҙ һаулығың - үҙ ҡулыңда" тигән семенар- кәңәшмә үткәрәсәген хәбәр итте, һәм беҙ юлға сыҡтыҡ.**

Мәҙәниәт йорто алдында килгән ҡунаҡтарҙы Мансур ауылы хакимиәте башлығы Ишбулды Батыршин һәм йырҙар йырлап, кәзә ҡымыҙы, буҙа менән һыйлап, Мансур ағинәйҙәре ҡаршы алды. Мәҙәниәт йорто был көндә айырыуса матур итеп йыйыштырылғайны. Боронғо келәмдәр, һандыҡтар, самауыр, башҡа ҡаралтылар, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡул эштәре күргәҙмәһе үҙе байрамса йәм биреп тора. Түрҙәрәк иһә шулай уҡ күргәҙмәгә ҡуйылған өҫтәлдәр теҙелеп китә. 1-се өҫтәлдә данлы башҡорт балы төрлө-төрлө һауыттарҙа урын алған. 2-се өҫтәлдә үҙебеҙҙең Учалы районында үҫкән һәм киптерелгән дарыу үләндәре теҙелгән. 3-сө өҫтәлгә үлән тамырҙарынан эшләнгән майҙар, бәлзәмдәр, дарыуҙар, ә 4-се өҫтәлгә кәзә һөтөнөн эшләнгән ҡымыҙ, кәзә һөтө ҡуйылған. 5-се өҫтәлдә иһә ҡот ҡойоу өсөн кәрәк-яраҡтар һәм һөлөк һалынған банкалар урынлаштырылған.

Сараны ауыл хакимиәте башлығы Ишбулды Фазыл улы асты. Ул "Һеҙ донъяның тотҡаһы", тип, ауыл ағинәйҙәре ойошмаһы эшенә юғары баһа бирҙе, моңһоҙҙарға - моң таратыусы, дәртһеҙҙәргә - дәрт өҫтәүсе оло быуын ҡатын-ҡыҙҙарының ҙур тәрбиәүи эштәр алып барыуы, урындағы етәкселәргә оло ярҙамсы булыуы тураһында һөйләне.

Артабан телмәр тотоусылар һаулыҡты һаҡлауҙың төрлө саралары, халыҡ дауаһы алымдары, шифалы үләндәр хаҡында һүҙ алып барҙы. Роза исемле ағинәй кәзә һөтөнөң, кәзә ҡымыҙының, кәзә мамығынан бәйләнгән шәл, ойоҡбаш, бирсәткәләрҙең файҙаһы тураһында, шәфҡәт туташы Мөхәримә Ғайсарова һөлөк дауаһы, тағы бер шәфҡәт туташы Мәмдүҙә Мөхтәруллина ҡот ҡойоу, кернә тартыу алымдары, Ольга Степанова данлы башҡорт балының дауалау үҙенсәлектәре хаҡында һөйләне. Зәйнәп Вилдановнаның май айынан алып үләндәр йыйыу менән мәшғүл булыуы, үләндәрҙең шифалы үҙенсәлектәрен һанап китеүе лә ҡыҙыҡһынып ҡабул ителде: "Май айында ҡайын япрағы, кесерткән, дегәнәк, бәпкә үләндәре, июндә - төрлө сәскәләрҙе йыйырға, көҙ көнө тамырҙар ҡаҙып алырға кәрәк. Уларҙы йыуып киптереп, майҙар, бәлзәмдәр, төнәтмәләр эшләп ҡуйыу кәрәк", - тине ул. Килмәк ауылынан килгән Райхана исемле ағинәй үҙе йыйып ҡулланған үләндәрен күрһәтеп, һәр үләндең ниндәй ауырыуҙан файҙалы икәнен, ошо үләндәр ярҙамында үҙенең ауырып киткән тормош иптәшен аяҡҡа баҫтырыуын бәйән итте. Сораман ауылынан саҡырылған Зөбәйҙә Кәләмованың намаҙҙың һаулыҡҡа файҙаһы тураһындағы мәғлүмәте бигерәк тә ихлас ҡабул ителде. Шәүрә Нәҙершина аҡ балсыҡтың файҙаһы тураһында аңлатып китте: "Аҡ балсыҡты ҡаҙып алғас, көндөҙ ҡояш нурҙары аҫтында көнө буйы тотаһың, - тине ул.- Кис булғас, уны йыйып алаһың, сөнки уны айға күрһәтергә ярамай. 5-6 көн шулай ҡабатларға кәрәк, сөнки аҡ балсыҡ ҡояштан энергия алырға тейеш. Шунан һуң уны банкаға һалып, өҫтөнә һыу ҡойоп, ултыртып ҡуяһың. Һыуын һарҡыткас, ҡаймаҡ кеүек шыйыҡса барлыҡҡа килә. Ошо шыйыҡсаны марляға һөртөп, һыҙлаған ереңә ябырға, өҫтөнән полиэтилин урарға. Бер нисә сәғәт тотҡандан һуң, ул марляны ергә күмергә кәрәк. Бер ҡулланған балсыҡты икенсе тапҡыр ҡулланырға ярамай. Ошолай әҙерләнгән аҡ балсыҡты аяҡтар, ҡулдар, быуындар, хатта теш һыҙлағанда ҡулланырға мөмкин..."

Сығыштар тамамланып, үҙ һаулығыбыҙҙы һаҡлау үҙ ҡулыбыҙҙа, ә дауалау сараларының йәнтөйәгебеҙҙә икәнен аңғартып йомғаҡ яһағандан һуң, кемдәрҙер йөрәк һылатты, кемдәрҙер ҡот ҡойҙорҙо, кемдәрҙер һөлөк һалдыртты, кемдәрҙер үләндәр буйынса кәңәштәр менән уртаҡлашыуҙы дауам итте. Шунан ҡунаҡтарҙы мәктәп ашханаһына төшкө ашҡа саҡырҙылар. Мәктәп эсендәге бөхтәлек, балаларҙың хеҙмәт дәрестәрендә эшләгән, теккән әйберҙәренән күргәҙмә, уҡыусыларҙың матур сығыштары, йыр-бейеүҙәре тағы бер хайран итте ҡунаҡтарҙы. Ә иң һоҡландырғаны - ауыл хакимиәте башлығы, мәктәп директоры кеүек етәкселәрҙең ихласлығы, ағинәйҙәрҙең, улар үткәргән сараларҙың ауылдарҙы, халҡыбыҙ йолаларын һаҡлауҙағы әһәмиәтен аңлауы ине.

**Йәмилә НУРДӘҮЛӘТОВА.**
**Учалы районы.**

# ҒӘМӘЛДӘРЕБЕҘ...

## ҡоро һүҙ түгел

**Әбйәлил районы үҙәге Асҡар мәҙәниәт һарайында район ағинәйҙәре ҡоро булып үтте. Унда райондың барлыҡ ауылдарынан тиерлек 300-ләп ҡатын-ҡыҙ ҡатнашты.**

Ойошма барлыҡҡа килгәндән алып башҡарылған эштәр ҡоро һүҙҙә, сығыштарҙа, ҡағыҙҙа ғына түгел, ә ғәмәлдәрҙә икәне шунда уҡ аңлашылды: район мәҙәниәт һарайы фойеһында ауыл биләмәләре ағинәйҙәре ҙур күргәҙмә ҡороп ебәрҙе. Милли аш-һыу, кейем, биҙәүестәр, ҡул эштәре күргәҙмәһенән саф башҡорт рухы бөркөлдө, сағыулыҡтан күҙҙәр ҡамашты. Күргәҙмәнең иң ҡиммәтле "экспонаттары" ағинәйҙәр үҙҙәре булды. Ғәжәйеп бер күренеш булды был: төрлө ауылдарҙан йыйылған ағинәйҙәрҙең барыһы ла милли кулдәктә, үҙ ҡулдары менән эшләгән селтәрҙә һәм ҡашмауҙа ине.

- "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ойошторол ҡына йөрөгәндә, бынан биш йыл элек, "Эште ниҙән башлайыҡ?" тигән һорауға:"Әйҙәгеҙ, милли кейемдәр тегеп кейеүҙән башлайыҡ!" - тип яуаплағайным. Шулай иттек тә. Мин әле ул ваҡытта милли кейемдең, ошо милли биҙәүестәребеҙҙең ниндәй мөғжизәле ҡеүәткә эйә булғанын бик күҙ алдыма ла килтермәгәйнем. Берҙән, ул ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йөҙөнә, буй-һынына ҡот ҡундырҙы; икенсенән, ошо кейем ҡатын-ҡыҙҙы иман нурына төрҙө лә ҡуйҙы. Милли кейем кейгән ҡатын-ҡыҙ ҙа, ир-егет тә үҙен дәрәжәле, ғорур, лайыҡлы тоторға, артыҡ хәрәкәт эшләмәҫкә, һүҙҙәрен дә самалап, иплән һөйләргә өйрәнә, имеш. Барыһы ла ошо хәҡиҡәттә дәлилләй, быны мин үҙем дә тоям... - тине Өфөнән килеп еткән ҡунаҡ - Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева.

Район ағинәйҙәре ойошмаһы етәксеһе Роза Таһирова иһә Әбйәлил ағинәйҙәренең бихисап бурыстары, балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә, айыҡлыҡ өсөн көрәштә, милли йолаларыбыҙҙы тергеҙеүҙә ал-ял белмәй эшләүе тураһында һөйләне. Уның билдәләүенсә, Әбйәлил ағинәйҙәре район сараларында ғына түгел, республикала үткәндәрендә лә ихлас ҡатнаша. Былтыр май айында Өфөлә үткән милли кейем байрамында ла, йәй көнө Күгәрсен районында үткән республика ағинәйҙәре ҡоронда ла, де-



***✓ Һәр ваҡиғала тәрән мәғәнә бар икәнен тойоп йәшәгәндә, бөтөн тормошоғоҙ мәғәнә менән тулыр. Ниндәйҙер һынау нимә өсөн бирелгәнен асыҡлағыҙ һәм уны лайыҡлы үтегеҙ, шул ваҡытта ул ҡабат әйләнеп ҡайтмаҫ.***



### ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

**"Киләсәккә юл һалғанда, боронғоларға боролоп ҡарау яҡшы", тип әйткән бер аҡыллы кеше. Ысынлап та, һуңғы йылдарҙа әүҙемләшеп киткән Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының "Ағинәй" республика йәмәғәт ойошмаһының эшмәкәрлеге тап ошо һүҙҙәргә таянып башҡарыла кеүек. Гәзит-журналдарҙан уҡып, радио-телевидениенан ишетеп-ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ уҙғарған сараларға һоҡланмаған, уның кәрәклеген аңламаған кеше юҡтыр, моғайын. Сөнки бөтөн был сараларҙың маҡсаты - ул халҡыбыҙҙы берләштереп, үткәнебеҙгә байҡау яһап, тамырҙарыбыҙ бик тәрәнгә киткән тарихыбыҙ, йолаларыбыҙ, йыр-моңдарыбыҙҙы йәш быуынға түкмәй- сәсмәй илтеп еткереү һәм уларҙа ошо милли мираҫыбыҙға һөйөү тәрбиәләү бит.**

# АҒИНӘЙҘӘР ҺҮҘЕ...

## аҡылдың үҙе

Ошондай бурыстарҙы атҡарып, республикала күптән танылыу яулаған Баймаҡ, Учалы, Хәйбулла, Әбйәлил һәм башҡа райондар ағинәйҙәренең әүҙемлегенә һоҡланып, былтыр беҙҙең Көйөргәҙе районында ла ағинәйҙәр ҡоро ойоштоaccess роллдо. Районыбыҙҙа 12 ауыл биләмәһе булып, иң тәүҙә шул ауыл биләмәләренең төп ағинәйҙәрен билдәләнек, артабан ул ағинәйҙәр үҙҙәре эргәһенә ауылдың иң абруйлы, ихтирам ҡаҙанған ҡатын-ҡыҙҙарын туплап, ауыл биләмәләре башлыҡтары, ауыл старосталары ярҙамында эш башлап ебәрҙе. Йәш быуынға милли асылыбыҙға ярашлы рухи тәрбиә биреү, телгә, мәҙәниәтебеҙгә һөйөү тәрбиәләү, милләттәштәребеҙҙе айыҡ-сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу, башҡорт ғаиләһенә хас ҡиммәттәрҙе, халҡыбыҙ йолаларын тергеҙеү - ошондай йүнәлештә эш башлап ебәреп, беҙҙең ағинәйҙәр ҙә ауылдарҙа халыҡ менән осрашыуҙар, ғаиләләр менән тәрбиәүи һөйләшеүҙәр һәм башҡа бик күп төрлө саралар үткәрҙе. Һәм бына ошо арала беҙ, район ағинәйҙәре, атҡарғандарҙы барлар, бер-беребеҙ менән аралашыр, хәл итәһе мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшер, тәжрибә уртаҡлашыр, уртаҡ уй-фекер туплар өсөн ҡорға йыйылдыҡ. Ҡор район мәҙәниәт йортонда үтеп, район үҙәге иртәнге сәғәттән үк байрам төҫө алды. Ҡурай моңо, башҡорт халыҡ йырҙары яңғырап, Ермолаево халҡын байрамға, оло ҡорға саҡырып торҙо.

Байрамдың тәүге өлөшөндә һәр ауыл биләмәһе ағинәйҙәре үҙҙәре бешергән милли ризыҡтарҙан, үҙҙәре башҡарған ҡул эштәренән күргәҙмә ойошторҙо. Аш-һыуҙың ниндәйе генә юҡ ине: буҙа, ҡымыҙ, эретелгән ыуыҙ, ҡарта, көлсә, төртмә, быҡтырылған ҡабаҡ, тултырма, ҡаҙы, бишбармаҡ, ҡаҡлаған ҡаҙ, һәр төрлө емештән яһалған ҡаҡ - һанап бөткөһөҙ. Һәр өҫтәлдә 20-25 төрлө милли ризыҡ ҡуйылғайны мәгәр. Ә ағинәйҙәр ҡулы менән башҡарылған ҡул эштәренән күҙҙәр тағы ла нығыраҡ ҡамашты. Һәм ошондай хозур матурлыҡ янында үҙҙәре теккән күлдәк-камзулдарҙа, ҡашмау- түшелдеректәрҙә 150-ләп ағинәй йылмайып баҫып тора. Күҙ алдына килтерәһегеҙме ошондай матур күренеште! Ысынлап та, "Һәр сәскәнең үҙ еҫе, һәр халыҡтың үҙ төҫө", тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр бит. Беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа тап ошо милли күлдәктәрҙә үҙ асылын, үҙ ҡотон сағылдыра ала ла инде. Ҡоробоҙҙоң икенсе өлөшөндә ағинәйҙәр сәхнәлә 12 командаға бүленеп, оҫталыҡта ярышты. Беренсе бәйге "Мин - ағинәй" тип аталып, ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәренең ағинәйлек бурысы тураһында шиғыр, йыр менән бәйән итте. Икенсеһендә улар бишек йырҙары башҡарыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте. Өсөнсө бәйге иһә экология темаһына арналып, ағинәйҙәр үҙ ауыл биләмәләрендә башҡарылған һәм башҡарыласаҡ эштәрҙе барланы.

Ҡоробоҙҙоң мәртәбәле ҡунағы - виртуоз ҡумыҙсы, халыҡ-ара конкурстар лауреаты Миңлеғәфур Зәйнетдинов махсус саҡырылғайны. Ул ағинәйҙәргә ҡумыҙ уйнау буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрҙе, улы Азамат менән бергәләп бер нисә төрлө ҡумыҙҙа өҙҙөрөп уйнап, йыйылыусыларға иҫтәлекле мәлдәр бүләк итте.

Һүҙемдең аҙағында шуны әйткем килә: йәмәғәт ойошмаларының эшен еренә еткереп башҡарып була, әгәр ҙә был эштә һәр яҡлап ярҙам һәм терәк булһа. Был йәһәттән беҙ Көйөргәҙе районы хакимиәте башлығының да, уның урынбаҫарҙарының да, шулай уҡ районыбыҙ башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесенең дә ярҙамын тоябыҙ. Был ҡорҙо ойоштороуға ла ярҙам итте улар. Ә район Хәйриә фонды иҫтәлекле бүләктәре менән ағинәйҙәрҙең күңелен күрҙе. Рәхмәтлебеҙ барыһына ла.

**Тамара МАЛБАЕВА,**
**Көйөргәҙе районы**
**"Ағинәй" йәмәғәт**
**ойошмаһы етәксеһе.**

кабрҙә шулай уҡ Өфөлә үткән "Селтәр" конкурсының йомғаҡлау кисәһендә лә иң әүҙем һәм иң күп ҡатнашыусылар әбйәлилдәр булған.

Бына шулай, кейемдәре менән дә, йәшәү рәүештәре, һөйләгән һүҙҙәре менән дә, хатта сәхнәләрҙә йырлап-бейеп, төрлө йолалар атҡарып йөрөүҙәре менән дә донъябыҙға ҡот ҡундыра, ауылдарға йәшәү рухы өҫтәй ағинәйҙәребеҙ. Иң мөһиме, был эштәрҙе улар үҙ ирке менән, бер кем дә ҡушмаҫтан, бер ниндәй түләүҙәргә лә өмөт итмәй башҡара. Урындарҙағы етәкселәр шуға ла рәхмәтле был йәмәғәт ойошмаһы ағзаларына. Әлеге ҡорҙа ла район хакимиәтенең эштәр идарасыһы Урал Хәлисов, район башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Вил Илһамов, район ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе Лениза Сәғәҙиева "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының район тормошондағы ролен, рухи, тәрбиәүи йүнәлештәге әүҙем эшмәкәрлеген лайыҡлы баһалап, ағинәйҙәрҙе тормоштоң төрлө кире күренештәренә ҡаршы бергәләп көрәшергә саҡырҙы.

**Гөлнара ФӘТХУЛЛИНА.**



*Әбйәлил районы ағинәйҙәре.*

### УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Иң етди һабаҡтарҙы беҙ ауыр хәл-торошта аңлайбыҙ. Тормошоғоҙҙа ҡасан мөһим ҡарарҙар ҡабул итергә тура килде? Ҙур һәләкәт йәки нимәләр барып сыҡмағандан һуң, шулаймы? Йәғни тормош беҙҙе тубыҡландырҙы һәм башыбыҙға матур итеп һуғып алды. Тап шул ваҡыттарҙа: "Ярлылыҡтан туйҙым! Йомошсо малай роленән ялҡтым! Уртаса булыуҙан арыным! Нимәләр эшләргә кәрәк!" - тибеҙ. Уңыштар беҙҙе ҡыуандыра, әммә бер нәмәгә лә өйрәтмәй. Ә уңышһыҙлыҡтар ныҡ ауыр киҫерелә, тап шуға күрә лә киләсәк өсөн яҡшы фән ул. Һуңынан артҡа ҡарап беҙ, ҡағиҙә булараҡ, ошо һәләкәттәрҙең тормошобоҙҙағы һынылыш нөктәһе булыуын яҡшы аңлайбыҙ. Һөҙөмтәле кешеләр, әлбиттә, үҙҙәре проблема эҙләмәй, әммә тормош баштарына бер тапҡыр яҡшы ғына итеп тондорғас: "Нисек итеп уйҙарымды һәм фиғелемде үҙгәртергә? Нисек итеп бөгөнгөнән яҡшыраҡ булырға?" - тигән һорау ҡуя. Башҡалар иһә барлыҡ иҫкәртеүҙәргә иғтибар итмәй һәм донъя терәүҙәре емерелә башлағас: "Ни өсөн былар барыһы ла минең менән була?" - тип аптырай. Беҙ - ғәҙәттәребеҙҙең ҡолдары. Нимәләр үҙгәрергә мәжбүр итмәйенсә, һаманғаса нимә эшләгәнбеҙ, шуны артабан да эшләүҙе дауам итәсәкбеҙ.Тормош - ауыр һәләкәттәр сылбырымы? Мотлаҡ түгел. Йыһан беҙҙе һәр саҡ кәрәкле йүнәлешкә этәреп тора. Әгәр иғтибар бирмәйбеҙ икән, суҡмар менән дөмбәҫләй башлай. Ошо процеҫҡа ҡаршылашҡан һайын үҫешеүе ауыраҡ.

**Һабаҡтар.** Ҡайһы бер ваҡиғалар башҡа һыймай. Әйтәйек, бала ВИЧ-инфекциялы булып тыуа, уғрылар йәш ҡатынды үлтерә, балалар әсәһеҙ ҡала йәки дауыл ер йөҙөнән барлыҡ халҡы менән бергә тотош ауылды юҡ итә. Бындай осраҡта "Ни өсөн?" тигән һорау ҡуябыҙ. Бындай катаклизмдарҙы бер нисек тә аңлатып булмай кеүек. Әммә икенсе, көндәлек тормош кимәлендә ниндәйҙер иҫкәртеүҙәрҙе табырға мөмкин. Ҡайһы бер кешеләрҙең тормошонда бер үк ваҡиғалар ҡабатланып тороуын иҫкә алғанығыҙ бармы? Ә бәғзеләрҙе, киреһенсә, күңелһеҙлектәр урап үтә. Һәр кемгә үҙ һабағы. Беҙ тормошто түбәндәге ысулдарҙың береһе буйынса ҡабул итәбеҙ.

- "Минең тормошом - миңә кәрәкле, бер-бер артлы һәм идеаль эҙмә-эҙлелектә килгән һабаҡтарҙың серияһы". (Күңел тыныслығының максималь кимәлен гарантиялаусы иң дөрөҫ ысул).
- "Тормош - ул лотерея, әммә мин булған барлыҡ мөмкинлектәрҙе лә файҙаланам". (Шулай уҡ дөрөҫ позиция. Уға ярашлы, урта кимәлле тормош тәьмин итәһең).
- "Ни өсөн миңә барлыҡ бәләләр ябырыла?" (Максимум ыҙаланыуҙар һәм фрустрациялар гарантиялай).

Тормош беҙгә аҙым һайын һабаҡтарын биреп тора. Уларҙы үҙләштермәгәндә, ҡабат-ҡабат урап ҡайтасаҡбыҙ. Быны Хоҙай эше тиһегеҙме, тәбиғәт ҡанунына бәйләйһегеҙме - схема үҙгәрмәйәсәк. Оҡшаймы, оҡшамаймы - был хәл шулай дауам итәсәк. Ҡыҫҡаһы, тормош беҙгә яза бирмәй, ул беҙҙе уҡыта. Беҙ ошо белем өсөн йәшәйбеҙ. Һәр ваҡиға беҙҙе үҙгәртергә һәләтле, әммә фекерләү образын үҙгәртеү өсөн һәләкәтле ваҡиға кәрәк. Һәр ваҡиғала тәрән мәғәнә бар икәнен тойоп йәшәгәндә, бөтөн тормошоғоҙ мәғәнә менән тулыр. Ниндәйҙер һынау нимә өсөн бирелгәнен асыҡлағыҙ һәм уны лайыҡлы үтегеҙ, шул ваҡытта ул ҡабат әйләнеп ҡайтмаҫ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ӘБЙӘЛИЛДЕҢ ТӘБИҒӘТ ҠОМАРТҠЫЛАРЫ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**11-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Кәзәкей. Йәшен. Иҥемури. Ғаян. Шахмат. Байман. Әмәл. На. Ойошма. Ыҡлау. Аванс. Милләт. Арҙаҡлау. Тағараҡ. Наза. Лыҡа. Йыла. Сана. Иглу. Уҡ.

**Вертикаль буйынса:** Бауырһаҡ. Ғәйзуллин. Угата. Инаныс. Ғайсин. Зәйнетдинов. Аласуҡ. Упҡын. Лыҡы. Йәншишмә. Муллабаев. Оялсан. Миләш. Тырма. Тура.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Учалы районы** Уральск ауылынан Айгөл Шәгәйепова, **Баймаҡ районы** Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, **Өфө ҡалаһынан** Лилиә Нафиҡова, Гөлнара Әхмәтшина, **Хәйбулла районы** Яңы Ергән ауылынан Шәрифйән Шәрипов, **Әбйәлил районы** Яңы Балапан ауылынан Фәрих Бикжанов, Әбйәлил ауылынан Нәзифә Әхтәмова, **Белорет районы** Үткәл ауылынан Фәрзәнә Хәйбуллина, **Архангел районы** Архангел ауылынан Венера Мостафина, **Бишбүләк районы** Ҡаныҡай ауылынан Мәүлиха Солтанова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Яҙҙар һеҙгә яңы бәхеттәр, яңы шатлыҡ-ҡыуаныстар, яңы хистәр бүләк итһен, сәләмәтлектә, именлектә, муллыҡта йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**1 апрель "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+

**2 апрель "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт 12+

**4 апрель "Йәнем, иртәгә яңы көн тыуыр"** (Я. Пулинович), драма

**5 апрель "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А. Островский), драма

**6 апрель "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**7 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 апрель "Нух кәмәһе"** (У. Хуб), ғаилә өсөн тамаша. Башлана 12.00 0+

**2 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**2 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миннуллин), музыкаль комедия. Башлана 18.00 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 апрель "Беҙҙән һеҙгә - шәп кәйеф!"** "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор ансамбле 6+

**7 апрель "Коҙағый"** (Р. Назарғолова), мелодрама 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 апрель "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен)

**2 апрель "Вот так репка!"** (И. Токмакова). Башлана 12.00, 14.00 0+

**2 апрель "Әминбәк"** (Р. Янбулатова). Башлана 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 3 (6) дүшәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:25 | 19:55 | 21:25 |
| 4 (7) шишәмбе | 5:12 | 6:42 | 13:30 | 18:26 | 19:56 | 21:26 |
| 5 (8) шаршамбы | 5:10 | 6:40 | 13:30 | 18:28 | 19:58 | 21:28 |
| 6 (9) кесе йома | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 18:30 | 20:00 | 21:30 |
| 7 (10) йома | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:32 | 20:02 | 21:32 |
| 8 (11) шәмбе | 5:02 | 6:32 | 13:30 | 18:34 | 20:04 | 21:34 |
| 9 (12) йәкшәмбе | 5:00 | 6:30 | 13:30 | 18:36 | 20:06 | 21:36 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ЯҠШЫЛЫҠ ҺӨЙӨГӨҘ

"Яҡшылыҡты өммәтемдәге мәрхәмәтле кешеләрҙән эҙләгеҙ", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм, - улар тирәһендә йөрөгөҙ. Эй, Ғәли! Яҡшылыҡты ла, уға лайыҡлы булған кешеләрен дә Аллаһы Тәғәлә Үҙе яралтып бар итте, яҡшылыҡ менән яҡшы эштәрҙе һөйөргә лә Ул Үҙе өйрәтте, ҡороп бөткән ерҙе ямғыр һыуҙары менән терелткән кеүек, ярҙамға мохтажлыҡ кисергән бәндәләрҙе лә Ул яҡшы күңелле кешеләр менән ҡеүәтләне. Донъяла яҡшы булған кешеләр әхирәттә лә яҡшы булыр".

"Тыуыр быуындар һинең тормоштан фәһем алһын тиһәң, үтеп киткәндәр әҙәбенән үҙең дә ғибрәт ала бел".

"Теләһә кемдең теләһә нимә һөйләгәненә яуап биреп барма, насар кешенең яман һүҙе лә бөтөрлөк булмай, бер һүҙенә мең яуабы әҙер. Сөнки бөкрө кешенең шәүләһе лә бөкрө".

Кешене дин тәртип ҡыҫаларынан ысҡындырмай. Тәртип тигәндә лә, ата-әсәгә ҡарата игелекле булырға өндәп торғанда ла ул иң элек бөтә кешеләргә ҡарата игтибарлы булыуҙы күҙ уңында тота.

"Ата-әсәгә хөрмәттең иң ҙур сағылышы - уҙҙәре үлеп ҡалғандан һуң да кешенең уҙ атаһы һөйөп йөрөгәндәр менән араны өҙмәй йәшәй белеүе", - тигән Бәйғәмбәр ғәләйһиссәләм.

"Атайың һөйөп йөрөгән кешеләр менән элемтәләрҙе өҙмә, өҙә ҡалһаң, Аллаһ һинең үҙеңдәге нурҙы һүндерер", - тигән ул.

ҠЫҪҠА ИНТЕРВЬЮ

# МИЛЛИ ТЕАТР ҘА...

## эҙләнергә тейеш



**Башҡорт милли театры - ул романтик театр, шуға ла бөгөн дә тамашасыларға сәхнәлә матур мөхәббәт тарихтары, хис-тойғолар ҡойоно, йыр-бейеү яҡыныраҡ кеүек. Шулай ҙа бөгөнгө башҡорт театры ниндәй юлдан китергә, ниндәй юҫыкта үҫешергә тейеш? Ошолар тураһында Стәрлетамаҡ дәүләт башҡорт драма театры режиссеры Айҙар Марат улы ЗАРИПОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Һеҙ режиссураға актерлыҡ һөнәре аша килгән кеше. Һөнәр алыштырыу һеҙҙәмтәһендә театр сәнғәтенә ҡарашығыҙ үҙгәрҙеме?**

- Актер булып, мин ниндәйҙер ҙур ролдәр эшләнем, тип әйтә алмайым. Әммә режиссер актер һөнәренең нескәлектәрен белһә, яҡшыраҡ. Зиннур Фәрит улы Сөләймәнов менән Стәрлетамаҡ мәҙәниәт колледжында студенттарҙы уҡыта башлағас, унда спектаклдәр ҡуйырға ла тура килде һәм мин йәйләп ошо юлды һайланым. Әлеге мәлдә Борис Щукин исемендәге Театр институтында белем алам, бер юлы театрҙа режиссер булараҡ та эшләп йөрөйөм. Әлбиттә, һөнәрҙең сөмгөлдәренә нығыраҡ сумған һайын, үҙең өсөн күп нәмә асаһың. Йәйләп, элекке ҡараштар ҙа үҙгәрә. Төрлө әҫәрҙәр, Мәскәү театрҙары спектаклдәрен күреү һөҙөмтәһе был. Һәр хәлдә, мин тормошомдо театр менән бәйләүемә шатмын. Театр мине үҙгәртте, ул минә ireклек тойғоһо бирҙе. Мин беҙ күп нәмәгә һәләтле икәнебеҙҙе аңланым.

**➔ Режиссер булараҡ, тәүге эштәрегеҙ ниндәй?**

- Бөгөн башҡорт театрҙары өлкәндәр өсөн генә эшләмәй, беҙ балалар өсөн дә күп әҫәрҙәр сәхнәләштерәбеҙ. Мин дә әкиәттәрҙән башланым. Яңы йыл байрамына ике әкиәт яҙып, ҡуйыусы-режиссер булараҡ сығыш яһаным. Социаль спектакль, В. Сигарев буйынса - "Чума XXI века@zhizni.net", Илшат Йомағоловтоң "Мөхәббәт ҡоштары" пьесаһы буйынса "Һөйәрҙәргә ҡапҡан", В. Акермандың "Хыялдар тормошҡа ашыр ер" комедиялары, Салауат дәүләт башҡорт драма театрында Дамир Йосоповтың әҫәре буйынса "Ҡырмыҫҡа иләүе" әкиәтен сәхнәләштерҙем. Әле генә сәхнәгә Мөнир Ҡунафиндың "Люксембургҡа барып ҡайтҡансы" фантасмагорияһы сыҡты. Тамашаһы нисек ҡабул итер икән, тип борсолғайным, былай яҡшы тәьҫораттар менән таралыштылар шикелле. Заманса драматургия һәм режиссура үҙәге башҡорт авторҙарын үҫтереү йөнәтенән күп эш башҡара. Драматургтарҙы йыйып, пьесалар яҙҙырып, уларҙы тәнҡитселәр менән тикшереп, ике йыйынтыҡ сығарҙыҡ. Мөнир Ҡунафин менән беҙ шулай таныштыҡ. Театрҙарға бөгөн актуаль проблемалар кәрәк. Мөнир Ҡунафин әҫәрҙәрендә бер генә темаға мөрәжәғәт итмәй, был фантасмагорияла ла иман темаһы ла, ысын ир-егеттәр юҡ тигән ҡараштарға яуап та, динден әлеге ваҡытта ниндәй формала булыуы ла, экология ла, тағы ла әллә күпме күренештәр яҡтыртыла.

**➔ Режиссер булараҡ, нимә яҡыныраҡ - милли театрҙың традицияларымы, әллә эксперименттармы?**

- Бөтөн нәмә материалдан тора, һин барыбер унан этәреш алаһың. Эксперименттар шуныһы менән яҡшы, улар һиндә "икенсе һулыш" аса, актерҙарҙа ла улар үҙҙәре лә белмәгән-һиҙмәгән үҙенсәлектәре табыла. Үҙенде төрлө жанрҙа һынап ҡарарға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта милли театр традицияларына ла яҡшы мөнәсәбәттәмен. Шулай ҙа башҡорт театры күберәк үҙ ҡаҙанында ҡайнай кеүек тойола минә. Донъя театрҙары жанр йәһәтенән дә эксперименттар үткәрә, вербатим, документаль театрҙар барлыҡҡа килә. Элек театр халыҡҡа өҡшарға тырыша ине, хәҙерге заман театры үҙенең алдына ундай маҡсат ҡуймай. Ул ниндәй ҙә булһа тема күтәрә, оҡшаймы был спектакль тамашасыға, юҡмы, был турала ул борсолмай. Театр төрлө булырға тейеш, шул иҫәптән, милли театр ҙа.

**Ләйсән ДАЯНОВА**
**әңгәмәләште.**

ҠУЛДАН КИЛӘ!



# ЗАЛЫБЫҘҘА...



## француз иҙәне йәйелгән

**(Башы 9-сы биттә).**

**➔ Спортҡа ҡағылышлы тәжрибәгеҙ менән дә бүлешһәгеҙ ине.**

- Әлеге ваҡытта етешһеҙлек шул: олимпиада булған ваҡытта ғына аҡса ырғытып-ырғытып, спортты күтәреп алдылар ҙа, олимпиада тамамланғас, был эш туҡтап ҡалды. Спортты үҫтереп булмай хәҙер. Йөрөйһөң ҡайҙандыр теләнселәп, һорашып... Йөрөмәһәң, бер ниндәй ҙә уңышҡа өлгәшеп булмай. Ауылдарҙа йәш уҡытыусылар "һеҙҙең һымаҡ итеп эшләргә өйрәтегеҙ әле", тип, минән кәңәш һорай. Мин уларға юлдарын өйрәтәм ул өйрәтеүгә, әммә бөтә кеше лә һинең һымаҡ булдыра алмай шул. Бәлки, мин хәйләкәрерәкмендер ҙә. Күп эшкыуарҙарҙың балаларын уҡыттым, әле лә уҡытам. Уларҙан мин: "Балаң өсөн", - тип, ярҙам һорайым. Әлбиттә, "Һинән ярҙам алам да, балаңдан спортсы яһайым", тигән шарт ҡуймайым. Һәр бала матур, етеш спортзалда шөғөлләнергә тейеш. Был - норма булырға тейеш тә бит, ләкин беҙҙә ул норма юҡ. Беҙҙең мәктәпкә ҡала мәктәптәренән туғандар, туғандарҙың балалары килә лә: "Беҙҙең мәктәптең спорт залында һеҙҙәге һымаҡ бер нәмә лә юҡ ул", - тип аптырайҙар. Бөрйән районының төпкөл ауылы бит инде беҙ. "Һеҙҙең был иҙәнегеҙ нисек атала ул?" - тиҙәр. Беҙҙең спорт залында Францияла етештерелгән миллион ярым һумлыҡ юғары сифатлы ябыу йәйелгән. Физкультура һәм спорт буйынса Рәсәйҙә иң яҡшы мәктәп исемен алдыҡ бит. Ошо еңеүҙәрҙән һуң беҙгә грант аҡсаһы бүленде. Шул аҡса беҙҙең спорт залын йыһазландырыуға китте лә инде. Бына шулай, физкультурала, спортта беҙҙә балалар күтәрә. Баланы нисек күнектерәһең, ул һине шул тиклем итеп күтәрә. Физкультурала, тренерлыҡта уңышҡа өлгәшеүҙең артыҡ серҙәре юҡ: балаларға шөғөлләнеү өсөн шарттар булдыра алһаң, уларҙы яҡшы өйрәтә алһаң, шул етә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо материалды баҫмаға әҙерләгән саҡта мин "Бәйләнештә" социаль селтәрендә үҙемдең дуҫтарым араһында "Спорт менән шөғөлләнергә һиңә нимә ҡамасаулай?" тигән темаға һораулама үткәреп ҡараным. Шунда уҡ: "Минең үҙемә ялҡаулығым ҡамасаулай", - тип, ҡарашымды ла белдерҙем. Өс көн эсендә һораулама 60-тан ашыу кеше ҡатнашты. Тәҡдим ителгән ун яуап араһынан респонденттар әйткән иң популяры - "Ялҡаумын" булды. "Һиңә шөғөлләнмән ти, шөғөлләнәм!", "Эшем ауыр, көн аҙағына хәлем бөтә, көсөм ҡалмай...", "Спорт залдарына абонемент, спорт ҡорамалдары алырға аҡсам юҡ", "Ваҡыт юҡ" тип яуап бирҙе ҡалғандар. "Ә ниңә кәрәк миңә физик күнекмәләр, физик торошом менән ҡәнәғәтмен", тиеүселәр ҙә булды. Сибай ҡалаһынан уҡытыусы Ғилминур Янышеваның яуабы кеше холҡоноң асылын асты бугай: "Мин былтыр бер аҙ ауырыҡһыным һәм фитнес түңәрәгенә йөрөп, күнекмәләр менән шөғөлләнеп алдым. Ошо осорҙа, эштән арып ҡайтһам да, үҙемде "мәжбүр итеп" залға юллана инем. Ә залда шөғөлләнгәндән һуң арыуҙарым ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыға ине. Быйыл иһә ауырыу-һыҙланыуҙарға бирешмәүем арҡаһында сәләмәтлегемде ҡайғыртырға оноттом, фитнесҡа йөрөмәнем. Бына шулай, беҙ ауырыған саҡта ғына "уянабыҙ" шул. Башҡа ваҡытта ялҡаулыҡты еңә алмайбыҙ. Шуның өсөн сәләмәтлекте тәүге урынға ҡуйырға, ауырыуҙарҙы иҫкәртеү өсөн төрлө һауыҡтырыу күнекмәләре эшләргә күнегергә кәрәк һәр кемгә..."**

**Иҙел РӘХИМОВ әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИШӘК - АУЫРЫҒАНЫН,

## ир ҡартайғанын белмәҫ

Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаҫ, кәрәк солтан булһын, кәрәк император...

**(Аҡмулла).**

Талантлылар һәм талантһыҙҙар бәйгеһендә уртаҡулдар уҙып киткән һәммәһен дә.

**(Рәшит Шәкүр).**

Кем байлығы булып та, уны башҡалар менән дә бүлешмәй, үҙе өсөн дә тотонмай, ул, баҫыуҙа сит кешенең игенен һаҡлаған һалам ҡараҫҡы кеүек, бер нәмәгә лә эйә түгел.

**(Һинд мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡыҙҙың ҡанаттары бар ине. Ә егет быны күрмәмешкә һалышты. Ҡыҙ оса белә ине. Ә егет был хаҡта ишетергә лә теләмәне. Таң менән уны алһыу болоттарҙан төшөрә лә: "Ҡуй, юҡты, иҫәрләнмә. Һин бит оса белмәйһең", - тип көлә генә ине. Ә ҡыҙ үпкәләмәне. Һаман да оса бирҙе. Яңғыҙы болоттар буйлап йөрөнө, әҙәм балаларының хыялдарын күҙәтте, шул хыялдарҙы нәзәкәтле бармаҡтары аша ҡом кеүек ҡойоп уйнаны.**

**Ҡыҙ ямғыр яратты. Ҡойондоң иң уртаһына барып, ул күк менән ерҙең шыбырҙап аралашҡанын тыңланы. Ә ямғыр туҡтағас, ул офоҡтан бейек тауҙарға тиклем йәйғор төшөрә ине. "Ҡуй, юҡты. Табылған рәссам..." - тип мыҫҡыллай ине егете.**

**Ә тағы ҡыҙ ысын шағир кеүек, һәр нәмәнең йәнен тоя ине. Урманға барһалар, үләндәр менән ағастар көләшкәнен, ҡырмыҫҡа менән бөжәк талашҡанын, сәскә менән бал ҡорто иркәләшкәнен сәғәттәр буйы һөйләр ине лә... " Ҡуй, бушты. Шағир, имеш..." - егетенең шулай тигәненән тағы күңеле ҡайта ине. Ә иң мөһиме - ҡыҙ ошо егетте ярата ине. Алһыу болоттар наҙын да, ямғыр йырҙарын да, йәйғорҙоң ете төҫөн дә тик уға ғына бағышлай ине. "Ҡуй, бушты, баш ҡатырма", - тип ҡул һелтәп кенә ҡуя ине егете.**

**Бер ваҡыт ҡыҙ түҙмәне, йондоҙҙарға табан осто ла осто, осто ла осто, осто ла осто... Һәм башҡаса егет янына ҡайтманы.**

**Ямғыр яуғанда егет тышҡа сыҡты, ер менән күктең һөйләшкәнен тыңлап, һөйгәне тураһында берәй хәбәр булмаҫмы, тип өмөтләнде, тик уларҙың бер һүҙен дә аңлай алманы. Ҡыҙҙың ете төҫ ҡәләмен алып, йәйғор төшөрҙө - тик бер нәмә лә килеп сыҡманы. "Мин рәссам түгел шул", - тип ҡуйҙы шунан. Урманға сығып ҡараны, әммә ағастар менән үләндәр ҙә, ҡырмыҫҡа менән бөжәктәр ҙә, сәскә менән бал ҡорто ла бер нәмә лә өндәшмәне уға. "Мин шағир түгел шул", - тип бошондо егет. Шунан ул ҡанаттар тағып, алһыу болоттарға үрмәләне. Иң бейек болотҡа баҫып, аҫҡа ҡарай һикерҙе. "Мин оса белмәйем шул", - тине һуңынан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Кин коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатникК» ауылпылыгы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 31 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5207
Заказ - 629/03